✓ Анау кеше ғәҙел булды,
Эше сауап. Уйы һәйбәт.
Тик барыһын ҡырып һалды
Ауыҙынан сыҡҡан ғәйбәт.

Раудил Бикбаев. "Өс йөҙ ҙә өс хәҙис".


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5 - 11 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№14 (588)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Дөм ҡараңғылыҡ осоронда...
Башҡортостан төньяҡ йондоҙолай булды



7

Әҙәм балаһы ер менән күк араһында:





8-9 унда иблислек тә, фәрештәлек тә бар...

Ир-егеттең күңелендә...
эйәрләнгән ат ятыр



11

Өләсәйҙәр һандығында...
ҡомартҡылар һәм тарихи хәтер



13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөтөн донъя сәләмәтлек көнө алдынан "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" тигән темаға һөйләшеп алайыҡ әле...

*Азамат АБДУЛЛИН, хаҡлы ялда:* Донъяуи ваҡиғаларҙы уйҙарыбыҙ аша беҙ үҙебеҙ формалаштырабыҙ. Шул иҫәптән һаулыҡ та беҙҙең донъяға булған ҡарашыбыҙҙың сағылышы. Позитив фекерле, үҙенә лә, башҡаларға ла тик изге мөнәсәбәттә булған, киләсәккә оптимизм менән баҡҡан кешеләр һәр көнөнә ҡыуанып, тормоштан йәм табып, булғанына шөкөр ҡылып йәшәй һәм бик һирәк ауырый. Ә күңелендә ҡурҡыу йөрөткән, күрә алмаусанлыҡ, шикләнеү, һауалылыҡ, көнләшеү, үҙен ғәйепле тойоу, рух төшөнкөлөгө, өмөтһеҙлек һәм башҡа ошондай тойғолар сорналышында ғүмер итеүселәр төрлө сирҙәрҙән интегә лә инде. Яман уйҙар кешене баҫа, йонсота һәм ахыр сиктә ауырыуға һабыштыра. Теге йәки был ауырыу "ярҙамында" тәнебеҙ беҙгә уйҙарыбыҙҙы һәм эшмәкәрлегебеҙҙе үҙгәртергә кәрәклеге хаҡында иҫкәртеп тора. Шуға күрә, миненсә, сирләп киткәндә услап дарыу ашарға түгел, ә тәү сиратта күңелде таҙартырға, бар негатив уйҙарҙан ҡотолорға, тынысланырға кәрәк. Сир буш урында барлыҡҡа килмәй, ул кешенең рух ныҡлығын тикшереү өсөн ебәрелгән оло һынау. Кемдер ул һынауҙы уңышлы үтә, ә кемдер һына. Барыһы ла кешенең үҙенән тора.

*Флүр НОҒОМАНОВ, табип-невролог:* Беҙҙең йәмғиәттә ни өсөндөр кеше һаулығын дәүләт ҡайғырта, тип ҡабул ителгән һәм ошоға дәүләт үҙе лә, халыҡ та инанған. Бының өсөн хатта Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы булдырылған, төрлө кимәлдә закондар ҡабул ителгән. Көн һайын бихисап яңы дарыуҙар уйлап табыла, медицинала барыһын да хайран иткән асыштар яһала, төрлө өлкәлә эшләүсе табиптарҙың һаны үҫә, квалификациялары арта. Ләкин шул уҡ ваҡытта быға тиклем билдәле булған сирҙәргә яңылары өҫтәлә. Медицина кимәле үҫкән һайын, ауырыуҙарҙың һаны арта. Бөгөнгө көндә 20 йәшлек егет һәм ҡыҙҙар үҙҙәренең атайәсәйҙәре улар йәшендә ишетеп тә белмәгән төрлө ауырыуҙан яфа сигә. Ни өсөн сирҙәрҙе әле булһа еңә алмайбыҙ? Сөнки теләмәйбеҙ. Ялҡаулығыбыҙға баш була алмайбыҙ. Насар ғәҙәттәрҙән арыныу урынына, уларға әленән-әле яңыларын өҫтәйбеҙ. Бына миңә күренергә килгән кешеләрҙең 60 проценты йылдар дауамында дауахана тупһаһын тапай. Мәҫәлән, ҡан баҫымының күтәрелеүенә йәки төшөүенә зарланып, көн һайын кәмендә өс-дүрт кеше килә. Уларҙың өстән ике өлөшө минең "яҡшы таныштарым", сөнки ярты йылға бер тапҡыр мотлаҡ осрашабыҙ. Табип яҙып биргән рецепт буйынса аҙна дауамында дарыуҙар ашайҙар ҙа, үҙҙәрен йүнәлгәнгә һанап йәшәй башлайҙар. Ләкин күп тә үтмәй, тышҡы билдәләре генә бөткән, ә төп сәбәбе юҡ ителмәгән сир уларҙы ҡабаттан аяҡтан йыға. Тәҡдим ителгән профилактик сараларҙы үтәү һәм сирҙе булдырмау урынына, бындай кешеләр яфаланыуҙарының бар сәбәбен медицинаның көсһөҙлөгөнә, табиптың белемһеҙлегенә алып килеп теркәй. Ә ысынында иһә, бар бәлә уларҙың үҙ сәләмәтлегенә булған битарафлыҡта. Үҙ сәләмәтлегенә иғтибарҙы йылына ике аҙна түгел, ә көн һайын бүлергә кәрәк. Әгәр ҙә кеше үҙе теләмәһә, дәүләт кимәлендә ниндәй генә программалар уйлап сығарылмаһын, сирҙәрҙән ҡотолоп булмаясаҡ.

Тағы шуны ла онотторға ярамай. Кеше булмышы һәм уның организмы, ағзалары бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән. Беҙгә оҡшаймы, юҡмы, күңелебеҙ, аңыбыҙ, рухыбыҙ һәм тәнебеҙ бергә эшләй, бергә "йәшәй". Әгәр ҙә тәнебеҙ тейешле кимәлдә эшләмәһә, аҡылыбыҙ ҙа зыян күрә. Әгәр инде күңелебеҙ "ауырый" икән - тәнебеҙ ҙә интегә. Шуға күрә, бар йәһәттән дә тигеҙлек һаҡлап йәшәргә тырышырға кәрәк.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# БӘЙГЕНЕҢ ҠИММӘТЕ...

## алған фәһем, һабаҡтар менән үлсәнә



"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2014" республика конкурсы 19-сы тапҡыр үҙ еңеүселәрен билдәләне. Был сараны республика райондарынан килгән мәғариф етәкселәре һәм хеҙмәткәрҙәре генә түгел, ә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫарҙары Хәләф Ишморатов менән Буранбай Күсәбаев, РФ Мәғариф һәм фән хеҙмәткәрҙәре профсоюзының Башҡортостан республика ойошмаһы етәксеһе Людмила Пронина, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы, Мәғарифты үҫтереү институты, Салауат ҡала хакимиәте етәкселәре, Салауат ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты, "Башҡортостан", "Киске Өфө" гәзиттәре редакциялары ла күтәрмәләне һәм конкурста ҡатнашыусыларға үҙ бүләктәрен тапшырҙы. Был бүләктәргә конкурс еңеүсеһе исеменә лайыҡ булған Ейәнсура районы Иҫәнғол башҡорт гимназия-интернаты уҡытыусыһы Гөлбаныу Исмәғилева (һүрәттә), конкурс лауреаттары - Мәләүез ҡалаһының 1-се гимназияһы уҡытыусыһы Гөлфара Әлиева, Өфө ҡалаһының 38-се дөйөм белем биреү мәктәбенән Гөлсөм Әбдрәхимова, Нефтекама ҡалаһының 10-сы мәктәбенән Әминә Зәкирйәнова, Әбйәлил районы Асҡар ауылының 1-се мәктәбенән Лира Абдрахманова ғына түгел, ә бәйгелә ҡатнашыусыларҙың барыһы ла лайыҡ булды.

(Дауамы 6-сы биттә).

✓ *Оҙайлы депрессия, һәр ваҡыт асыуланып йөрөү һаулыҡты ҡаҡшата, иммунитетты емерә һәм кеше төрлө инфекция, ауырыуҙар өсөн еңел табышҡа әйләнә. Ваҡытында хәл ителмәгән шәхси конфликттар төрлө ауырыуҙарға юл аса.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ӘЙБЕРЕҢДЕ ҠАЙҘА ҺАҠЛАЙҺЫҢ?



**Әле тәҡдим итәсәк аҡса эшләү ысулы хаҡында күптән уйлайым, ләкин эш башларға, беренсенән, ваҡыт ягы тар, икенсенән, матди йәһәттән хәл етмәй. Бәлки, гәзит уҡыусыларҙың береһе ҡолағына элеп, тормошҡа ашырыу өсөн мөмкинлек табыр.**

Төп идея ябай - граждандарҙың теге йәки был миҙгелдә кәрәк булмаған шәхси милкен һаҡлау өсөн склад асыу. Уның төп маҡсаты - тар ҡала фатирында йәшәүселәрҙең күп урынын алып торған төрлө әйберҙәренән азат итеү. Мәҫәлән, йәйен автомобиль хужаларына ҡышҡы тәгәрмәстәр кәрәкмәй, ә һаҡлау өсөн урын юҡ. Ошоно уҡ балалар санаһы, бар ғаилә ағзаларының санғы, коньки һәм башҡа күп әйберҙәренә ҡарата ла әйтеп була. Ҡышын иһә йәй кәрәк әйберҙәр - велосипед, поход өсөн кәрәк-яраҡ, баҡса ҡоралдарын ҡуйыр урын тапмайбыҙ. Шулай уҡ спорт менән шөғөлләнгәндәрҙең, балыҡсыларҙың да йә ҡышын, йә йәйен генә кәрәкле әйберҙәре бихисап. Күптәр проблеманы балкон ярҙамында хәл итә, ләкин йыл әйләнәһе бихисап әйбер менән тулы балкон йәмһеҙ күренеш хасил итә. Ә йорттарҙағы подвалдар хаҡында хатта һүҙ йөрөтәһе лә түгел: унда күпселек осраҡта бысраҡ.

Склад өсөн йылы, таҙа, етерлек ҙурлыҡтағы бинаның булыуы мөһим. Шулай уҡ уның махсус ҡорамалдар менән йыһазландырылған булыуы клиенттарҙы күберәк йәлеп итергә булышлыҡ итәсәк, сөнки һәр кем үҙ милкен тейешле шарттар булған ерҙә һаҡлауҙы хуп күрә. Тағы ла бер мөһим мәл: складтың кеше күп йәшәгән урында, йәғни ҡаланың эсендә булыуы шарт. Бер кем дә, мәҫәлән, санаһын һаҡлауға бирәм тиеп, махсус рәүештә ҡала ситенә сығып, әллә ҡайҙа урынлашҡан складты эҙләп йөрөмәйәсәк, ә тығыҙ булһа ла, өйөндә урын табасаҡ. Складтың эшмәкәрлек алып барыусының шәхси милкендә булыуы йәки ҡулайлы шарттарҙа ҡуртымға алыныуы шулай уҡ эштең алға китеүенә булышлыҡ итәсәк. Шулай уҡ был маҡсат өсөн буш торған шәхси гаражды ла ҡулланырға була. Унда бер генә йорттағы йәшәүселәр үҙҙәренең әйберен ҡуйһа, килем буласаҡ.

Эшмәкәрлек етерлек килем килтерһен өсөн рекламаға ҙур иғтибар бирергә кәрәк, тип уйлайым. Әлбиттә, телевидение йәки радио эфирында реклама нык ҡыйбат, шуға күрә бушлай иғлан баҫҡан гәзиттәргә мөрәжәғәт итергә, интернет селтәрен киң файҙаланырға, шулай уҡ урамда махсус флаерҙар таратырға була. Өс кешенең береһе иғтибар итһә лә, реклама үҙ файҙаһын бирәсәк. Складтың эш көнө тип, мәҫәлән, барыһына ла уңайлы шәмбене билдәләргә була. Хаҡты иһә һаҡлауға тапшырылған әйберҙең ҙурлығына, күпме ваҡытҡа килтерелеүенә ҡарап ҡуйырға мөмкин. Ә клиенттарҙы хеҙмәтләндереүҙе үҙ өҫтөнә алырға йәки бер кеше ялларға була. Хеҙмәткәрҙәрҙең күп булыуы эшкә зыян килтерергә мөмкин, сөнки улар бер-береһенә һылтанып, эште тотҡарлауы бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, был ысулды төп аҡса эшләү түгел, ә өҫтәмә килем килтереүсе сығанаҡ булараҡ ҡына ҡарарға мөмкин. Шулай ҙа ҙур оҫталыҡ талап итмәгән, күп ваҡытты алмаған был шөғөл икмәк-майлыҡ аҡса килтерер, тип ышанам.**

Сәғит ФӘХРИСЛАМОВ.
Өфө ҡалаһы.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Бөтөн донъя сәләмәтлек көнө алдынан "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" тигән темаға һөйләшеп алайыҡ әле...*

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәлимә ҒАЙСИНА, тәрбиәсе:*** Мин был һүҙҙәрҙе бер аҙ үҙгәртеп "Сәләмәт рух булһа - сәләмәт тән булыр", тип әйтер инем. Әгәр ҙә кеше рухи яҡтан ныҡ булһа, ул төрлө сирҙәргә бирешмәйәсәк. Тормоштоң ҡояшлы көндәрен дә, ел-дауыллы ваҡыттарын да артыҡ хисләнмәй, сыҙамлы булып үткәрә белергә кәрәк. Бар донъяңды онотоп шатланыу ҙа, ауыр ваҡиғаларҙы йөрәгеңә артыҡ яҡын алыу ҙа һаулыҡҡа зарар килтерә. Көндәлек тормоштағы күңелһеҙ ваҡиғаларға баш эйеп, үҙебеҙҙе тағы ла төпкәрәк этергә мөмкинлек бирергә ярамай, уларҙың барыһы ла һынау өсөн бирелә, шуға күрә тейешле һығымталар эшләп, рухты нығытып, артабан йәшәү өсөн көс табырға өйрәнергә кәрәк. Сәләмәт рух булғанда ғына сәләмәт тәнгә эйә булырға мөмкин. Кешенең психологик тороошо уның кәйефендә генә түгел, ә организмының һаҡланыу үҙенсәлектәрендә лә яҡшы сағыла. Оҙайлы депрессия, һәр ваҡыт асыуланып йөрөү һаулыҡты ҡаҡшата, иммунитетты емерә һәм кеше төрлө инфекция, ауырыуҙар өсөн еңел табышҡа әйләнә. Ваҡытында хәл ителмәгән көнкүреш, профессиональ һәм шәхси конфликттар төрлө ауырыуҙарға юл аса - кеше сирләй башлай. Шулай итеп, ҡотолғоһоҙ түңәрәк барлыҡҡа килә: психологик ауырыу - сир - сир арҡаһында стресс - хәлдең насарайыуы - тағы ла ауыр кисерештәр, һәм артабан. Бик һирәк осраҡта ғына кеше бар сирҙәренең дә башы күңел торошона бәйле булыуын аңлай. Шуға күрә, килеп тыуған проблемаларҙы үҙ ваҡытында хәл итеп, рухи тыныслыҡта, тимәк, ауырымай йәшәү өсөн тырышырға кәрәк.

Гөлназ МАНАПОВА
яҙып алды.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# МӘҒЛҮМӘТ АРАҺЫНДА...

## аҙашмаҫ өсөн

**Гәзит-журналдар йәмғиәттең мөһим институттарының береһе, улар мәғлүмәт бирә, нимәгәләр аныҡлыҡ индерә, аңлата, кешенең күңелен аса. Дөйөм алғанда, йәмғиәттең аңын тап улар формалаштыра һәм үҫтерә. Илдә һәм донъяла барған ваҡиғаларҙы һәм күренештәрҙе лә мәғлүмәт саралары аша һәм улар ярҙамында ҡабул итәбеҙ.**

Глобалләшеү һәм мәғлүмәтләштереү йәшәйешебеҙгә ҙур үҙгәрештәр индерә барған заманда милли матбуғаттың әһәмиәте лә үҫә. Тап глобалләшеү һәм тормошобоҙға интернет ярҙамында килеп ингән төрлө мәғлүмәт араһында аҙашып китмәү, барыһы ла донъя гражданинына әүерелә барғанда үҙеңдең милли асылыңды һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе үҙәк урынға сыға бөгөн. "Киске Өфө" ошо мөһим бурысты алға ҡуйып эшләгән баҫмаларҙың береһе, шуға ла уны һәр башҡорт кешеһе, йәштәр уҡырға тейеш.

Эйе, гәзит һәм журналдарҙың тираждары рекордтар ҡуйған замандарҙы күптән үттек. "Аргументы и факты" гәзитенең 33 млн тираж менән Гиннестар рекорд китабына инеүе хәҙерге көн өсөн ышанмаҫлыҡ ваҡиға.

Милли гәзит-журналдарҙың ҡулланыуы баҙары тағы ла тарыраҡ, шуға ла бөгөн баҫманың баһаһын тираж түгел, ә уның эстәлеге күберәк билдәләй. Гәзит уҡыу ул кешенең аң кимәленең билдәһе лә, шуға ла үҙен аңлы, илһөйәр тип иҫәпләгән һәр кемдең йортонда "Киске Өфө" гәзите булырға тейеш, тип иҫәпләйем.

Миңлегөл ИСҠАҠОВА,
БДУ уҡытыусыһы.

# ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Рәсәй почта хеҙмәтенән беҙҙә лә, һеҙҙә лә тетрәндерер хәбәр килеп етте: гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡы бер ваҡытта булмағанса ҡимммәтләнде.**

Мәҫәлән, 2014 йылдың икенсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тинғә**, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тинғә** яҙылырға кәрәк буласаҡ. Ләкин ошо хаҡтың яртыһынан аҙы - 246 һумы ғына беҙҙең редакция билдәләгән хаҡ булыуын да белеп ҡуйығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 336 һумға яҙылырға була әле. Был, ысынлап та, һәр яҡлап уңайлы - арзан да, почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **246 һум.**
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум.**



**Ә шулай ҙа гәзит уҡыусыларыбыҙ беҙҙең хәлде аңлар, ошондай ауыр һынауҙар мәлендә лә гәзитебеҙгә яҙылыу юлдарын, сараларын табыр, тип ышанып ҡалабыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан делегацияһы Ҡырым Республикаһына эш сәфәре менән барҙы. Делегацияны республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Рәүф Ноғоманов етәкләй. Ике көнлөк эш сәфәре барышында Ҡырым Министрҙар Советында осрашыуҙар планлаштырылған, унда ике Рәсәй республикаһы араһында хеҙмәттәшлек мәсьәләләре тикшереләсәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡарары буйынса республикала Ҡырым халҡына гуманитар ярҙам күрһәтеү өсөн аҡса йыйыу ойошторолғайны. 2 апрелгә ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, төбәк предприятиелары һәм халҡы был иҫәпкә 13 миллион 800 мең һумдан ашыу аҡса күсергән.

✓Башҡортостан Республикаһының Нефтекама ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлыġы итеп Рәшит Дәүләтов тәғәйенләнде. Быға тиклем Рәшит Дәүләтов "НефАЗ" асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә дәүләт власы органдары һәм йәмәғәтселек менән үҙ-ара эш итеү буйынса директор вазифаһын биләгән.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең бойороғо менән Камила Дәүләтованы республиканың мәғариф министры урынбаҫары итеп тәғәйенләне. Камила Йәүҙәт ҡыҙы Дәүләтова Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Сәйәсәт фәндәре кандидаты. Һуңғы ваҡытта ул Башҡортостан Президенты ярҙамсыһы вазифаһын башҡарҙы.

✓Өфө районы хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыу Вилорий Угаровҡа йөкмәтелде. Әле эшләп килгән Өфө районы хакимиәте башлығы Михаил Давыдовтың вәкәләте муниципаль хеҙмәт буйынса ваҡытынан алда пенсияға сығыу менән бәйле туктатылды.

✓**"Юлдаш" радиоһы RADIO STATION AWARDS 2014 конкурсында ҡатнаша. "Волга буйы федераль округының иң яҡшы радиостанцияһы" номинацияһында еңеү яуларға һеҙ ҙә булышлыҡ итә алаһығыҙ. "Юлдаш" еңеүсе булһын тиһәгеҙ, *http://radiostationawards.ru/nominations/volga* һылтанмаһы буйынса күсеп, көн һайын тауыш бирегеҙ. Был хаҡта дуҫтарығыҙға ла хәбәр итегеҙ. Әлеге мәлдә "Юлдаш" Сыуаштан радиоһынан саҡ ҡына артта ҡалып, 2-се урынды биләй. Тауыш бирергә бер ай самаһы ғына ваҡыт ҡалды.**

ШАҢДАУ

# НИМӘ УЛ МӘҘӘНИЛЕК?

**"Киске Өфө" гәзитенең 8-се һәм 10-сы һандарындағы "мәҙәнилек" төшөнсәһенең эстәлеген асыҡларға тырышҡан мәҡәләләрҙе уҡып, был мәсьәләгә ҡарата үҙ фекеремде белдерергә булдым.**

Минеңсә, мәҙәнилек - ул мәҙәниәт һарайҙарында күрһәтелгән тамашалар ғына түгел. Беҙҙә иһә, йылды Мәҙәниәт йылы тип нарыҡлап, мәҙәнилекте үҫтерәбеҙ тип, төп иғтибарҙы концерт, спектакль, телевизион тапшырыуҙар, рассамдар әҫәрҙәре күргәҙмәләренә генә йүнәлтәләр һымаҡ. Мәҙәниәттең был тармаҡтары иң тәү сиратта милли әҙәбиәткә нигеҙләнеп үҫешә, тип уйлайым. Шуға күрә, мәҙәнилек - ул тәү сиратта туған әҙәбиәтендә өйрәнеү, уҡыу ул. Ошоға бәйле, бөгөнгө көндә мәҙәни үҫеш юҫығындағы төп иғтибарҙы ауыҙ-тел ижады нигеҙендә формалашыусы әҙәбиәткә, йәғни яҙыусылар ижадына ла йүнәлтергә кәрәк. Боронғо ҡулъяҙма китаптарҙы, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады өлгөләрен, билдәле яҙыусы-шағирҙарыбыҙҙың, йәш таланттарыбыҙҙың ижад емештәрен ташҡа баҫыу, замананың һәр төрлө прогрессив ысулдары ярҙамында балаларыбыҙҙа, сит милләт вәкилдәрендә уларға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, иғтибар арттырыу маҡсатында ла эштәр алып барылһа ине. Сөнки йәштәр тәрбиәле, кешелекле, илһөйәр булһын өсөн уларға милли рухи ҡиммәттәрҙе, тарихты, милли үҙаңды сағылдырыусы әҙәби әҫәрҙәрҙе мотлаҡ уҡытырға кәрәк. Борон-борондан һәр башҡорт, ярлы булһынмы, хәлле булһынмы, балаһын уҡытырға ынтылған, мәҙрәсәгә биргән, ҡулдан-ҡулға күсереп, ҡулъяҙма китаптар уҡытҡан. Беҙҙең милли мәҙәнилегебеҙ ошо рәүешле, быуаттар буйы башҡа халыҡтар менән аралашып, фекер алышып формалашҡан. Йәш быуынға аманат итеп тапшырып ҡалдырырҙай әҙәби әҫәрҙәр, шиғырҙар ижад итә алырлыҡ шәхестәребеҙ булғанда, ни өсөн беҙ балаларыбыҙға интернет селтәре аша, электрон китаптар ярҙамында беҙҙең ерлеккә тап килмәгән, нигеҙендә беҙҙең рухи ҡиммәттәр ятмаған сит ил яҙыусылары әҫәрҙәрен уҡытабыҙ? Замана менән бергә атларға, үҙебеҙҙең әҙәбиәтте электрон китаптарҙа уҡытырға, интернет селтәрендә табырға мөмкинлек бирергә кәрәк. Ошо осраҡта башҡорт халҡының мәҙәни кимәле ниндәй юғары булыуы беҙҙең ҡайны бер зыялыларыбыҙға ғына түгел, йәштәргә лә, сит милләт кешеләренә лә мәғлүм буласаҡ. Халҡыбыҙҙың да мәҙәнилеге артасаҡ.

**Гөлфирә ГӘРӘЕВА,**
**филология фәндәре докторы,**
**БДУ профессоры.**

# ХАЛЫҠСАН ТӘРБИӘ ГЕНӘ...

## үҙ маҡсатына өлгәшә

**"Киске Өфө"нөң 8-се һанында "Ысын мәҙәнилекте кем нисек аңлай?" тигән мәҡәләне уҡығандан һуң, мин дә ҡулыма ҡәләм алырға булдым. Яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева был актуаль проблеманы бик урынлы күтәрә. Мәҙәнилектең туған телендә һөйләшеүендән, уны ҡәҙерләй белеүендән, уны ейәнейәнсәрҙәренә өйрәтеүҙән башлана икәнен күптәр онотоп ебәрә шул.**

Башҡорт халҡы борон-борондан һүҙ сәнғәтенә оло әһәмиәт биргән. Туған тел генә кешелә изгелек, миһырбанлыҡ, батырлыҡ, матурлыҡ сифаттарын тәрбиәләй ала икәнен аңлаған халҡыбыҙ. Әммә беҙ бөгөн ошо бөйөк хәҡиҡәтте онота төштөк. Хатта ауылдар ҙа туған телде һаҡлаусы бишек булыуҙан туҡтай бара. Ауылда көн итеүсе башҡорт ғаиләләрендә балалары менән русса һөйләшеүсе атай-әсәйҙәр күбәйә, йәнәһе, балаһы ситкә уҡырға китһә, уға унда башҡалар менән аралашыуы, аңлашыуы еңелерәк буласаҡ. Шул рәүешле, бала туған телендә аралашыуҙан мәхрүм итеп кенә ҡалмайҙар, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтенән, тарихынан, йола-көнкүрешенән айырып, уға ят мөхиттең ҡағыҙҙарен кәсләп тағалар. Бөйөк рус педагогы Константин Ушинский ҙа халыҡсан булмаған тәрбиәнең көсһөҙ булыуы тураһында әйтеп ҡалдырған бит.

Үткән быуаттың етмешенсе йылдары аҙағында юғары уҡыу йортон тамамлап, туғандарыбыҙ юллама менән Магадан яҡтарына эшкә китте. Ҡыҙҙары һәм улдары тыуҙы, сит милләттәр араһында йәшәһәләр ҙә, ҡыҙҙарына - Гүзәл, улдарына Таһир тигән башҡорт исеме бирҙеләр. Балаларҙың теле саф башҡортса асылды. Ул сабыйҙарҙың башҡорт телен нисек яратыуын белһәгеҙ һеҙ! Үҙ милләте менән ғорурлана ла белделәр. Магазинға инһәләр: "Әсәй, башҡортса һөйләшәйек, беҙҙең телдең ниндәй матур икәнен ишетһендәр", - тиҙәр икән. Башҡортостанға күсеп ҡайтҡас, Гүзәл Сибай ҡалаһының 6-сы мәктәбен алтын миҙалға тамамланы, Өфөлә Башҡорт дәүләт медицина университетын, Мәскәүҙә ординатура тамамлап, хәҙер баш ҡалала эшләй. Өйөндә гел генә башҡорт көйҙәре яңғырай, үҙе башҡорт телендә һөйләшә, башҡорт яҙыусыларының китаптарын уҡый, гәзит-журналдар алдыра. Быларҙың барыһы ла ата-әсәнең үҙ ваҡытында балаларына дөрөҫ тәрбиә биреүе, ҡайҙа ғына йөрөһәләр ҙә, туған телдәренә тоғро булыуҙарының һөҙөмтәһе. Бына, исмаһам, мәҙәнилек! Мин был ғаиләне русса һөйләшкән бөтөн башҡорт ғаиләләренә өлгө итеп ҡуйыр инем.

Мәрйәм апайҙың мәҙәнилек мәҙәниәт усаҡтарында башланырға тейеш, тигән фекере менән дә килешәм. Йыш ҡына беҙ телетапшырыуҙарҙа төрлө билдәле шәхестәрҙе күрәбеҙ, әммә шуныһы эсте бошора: был абруйлы һәм хөрмәтле ағай-апайҙар мотлаҡ рус һүҙҙәрен ҡушып һөйләшә. Мәҙәнилек өлгөһө булырға тейешле зыялыларҙың үҙҙәрен туған телендә аралашырға өйрәтергә кәрәк бөгөн.

Нисәмә йылдар инде халҡыбыҙҙы алдынғы ҡарашлы, абруйлы милләт итеп күрергә теләйбеҙ, әллә күпме сығыштар яһайбыҙ, өгөт-нәсихәт бирәбеҙ. Әммә уның киләсәге ябай ғына нәмәләрҙән - туған телендә һөйләшә белеүҙән, халҡыбыҙ ихтирам итеүҙән башланғанын ғел иҫебеҙҙә тотайыҡсы. Йәш быуын беҙҙән өлгө алып үҫә бит. Беҙ мәҙәни булһаҡ, улар ҙа, тимәк, тотош милләтебеҙ ҙә мәҙәни буласаҡ. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, хөрмәтле милләттәштәр, ил ағалары, зыялылар, телебеҙҙең киләсәге, уның яҙмышы беҙҙең ҡулда. Гәзиз башҡорт телендә һөйләшкән халыҡ булып ҡалайыҡ!

**Рәмилә СОЛТАНОВА.**
**Учалы районы Илсе ауылы.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИРҘЕ ИР ИТКӘН...

## ҡыҙҙар тәрбиәләйек

**Әминә БИКТАШЕВА, Сибай ҡалаһы:** Аллаға шөкөр, бөгөн тормош көтөүе күпкә еңелләште. Милләттәштәрем тырышып, ярышып донъя көтә, матди байлығын ишәйтә. Әммә фәҡәт мөлкәт артынан ғына ҡыуып, ҡайһы бер ғаиләләрҙә рухи ҡиммәттәргә тейешенсә иғтибар бүлеп еткерелмәй ҡала төҫлө. Балалар тәрбиәһенә ваҡытыбыҙ етмәй. Бигерәк тә ҡыҙ балаға дөрөҫ тәрбиә биреү яғы аҡһай. Ҡыҙҙарыбыҙ өсөн иң мөһиме - ғаиләлә йылы мөнәсәбәт булдырыу, иренә һәм балаларына тейешле тәрбиә күрһәтеү. Ошоно төшөндөрөп үҫтерергә кәрәк уларҙы. Юҡһа, бөгөнгө заманда беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар, ирҙәр кеүек үк, вазифа, аҡса, дәрәжә артынан ҡыуа. Ә бит аҡса эшләүҙән тыш, ҡатын-ҡыҙҙың иңенә өс ғиләнең: ата-әсәһенең, ҡайны-ҡәйнәһенең һәм үҙе ҡорған ғаиләнең абруйын һаҡлау, бәсен төшөрмәү бурысы ла һалына.

Тағы шул борсой: ғаиләләге күп кенә низағтар ҡатындың ире тапҡан малдан, эш хаҡынан ҡәнәғәт булмауынан килеп сыға. Ҡыҙҙарыбыҙға әйтелә торған һабаҡ шундай: эш хаҡың күберәк, ирең ялҡауыраҡ булһа ла, өй эсендә түр урын - уныҡы. Ирендә, ата ялҡау, аҡсаң икмәк-тоҙлоҡтан башҡа бер нәмәгә лә етмәй, тип битәрләр урынға уның яҡшы сифаттарын маҡтап, кире яҡтарын йомшаҡ ҡына итеп билдәләп, дөрөҫ юлға йүнәлтеп өйрәнергә кәрәк.

Бына әле ҡала урамдарында асарбаҡтарҙы йыш осратабыҙ. Улар береһе лә донъяға асарбаҡ булып тыумаған, бөтәһенең дә ғаиләһе, ҡатыны, балалары булған. Ә нишләп улар ошо хәлгә төшкән? Минеңсә, ҡатындары ғаиләлә ире өсөн тейешле шарттар тыуҙыра белмәгән. Шуға күрә лә иренең абруйы төшкән, ул тирә-яҡтағылар, үҙе алдында мәҫхәргә әйләнгән. Минең бер таныш ғаилә миҫалында ир-егеттәрҙе күтәрмәләп, маҡтап, ихтирам итеп тороу ғаилә тормошона нисек ыңғай йоғонто яһағанын күрергә мөмкин. Ауыл кешеләре был ғаилә башлығын һәр ваҡыт, ялҡау, тип битәрләне. Ә ҡатыны ирен яҡлап: "Ялҡау булһа ни... Уның йыры ғына ни тора! Ауыҙығыҙҙы асып тыңлап тораһығыҙ бит әле!"- ти торғайны. Был ғаиләлә бер-береңә ҡул күтәреү түгел, хатта тауыш сығарыу ҙа ишетелмәне. Өйҙә тыныс булғас, низағ ҡупмағас, балалары ла шул тиклем тәрбиәле булып үҫте, бөтәһе лә аталары кеүек талантлы, йырлайҙар. Шул таныштарыма ҡарайым да, ысын ҡатын-ҡыҙ эргәһендә генә ир-егет үҙ асылында булып ҡала, тигән уйға киләм.

Шуға күрә, ҡыҙҙарыбыҙҙы иң тәүҙә йолаларға таянып, ғаиләлә ир-атты күтәрмәләп йәшәргә өйрәтәйек. Шунһыҙ хатта башлыҡтар менән һөйләшер, милләтебеҙ мәнфәғәттәрен яҡларлыҡ та ир-егеттәребеҙ ҡалмаҫ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә "Йыл уҡытыусыһы-2014" Бөтөн Рәсәй конкурсының республика этабына старт бирелде. БР Мәғарифты үҫтереү институтында үткән сарала БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова ҡатнашты. Быйыл төбәктең иң яҡшы уҡытыусылары исемлегенә инеү өсөн 117 кеше бәйге тотасаҡ. Асыҡ дәрестәр, класс сәғәттәре, оҫталыҡ кластары, түңәрәк өҫтәлдәр һәм педагогик бәхәстәр йомғаҡтары буйынса абсолют еңеүсе һәм биш лауреат билдәләнәсәк. Уларҙың исемдәре конкурсты ябыу тантанаһында 8 апрелдә билдәле буласаҡ.

✓Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты Иршат Фәхретдинов "Парламентаризм үҫешенә өлөш индергәне өсөн" Дәүләт Думаһының Почет билдәһе менән бүләкләнде.

✓БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы фән һәм техника өлкәһендә йәштәр премияһына дәғүә итеүгә эштәр ҡабул итә башлауы тураһында иғлан итте.Тапшырыу ваҡыты - 1 июлгә тиклем. Эштәр киләһе адрес буйынса ҡабул ителә: Өфө, Ленин урамы, 10, 23-сө бүлмә, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығының һәләтле йәштәргә һәм йәштәр инициативаларына ярҙам итеү бүлеге. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 218-03-08. 2002 йылдан алып премияның күләме 150 мең һумға тиклем артты. Премияны ике йылға бер тапҡыр тапшыралар.

✓"2014 йылдың иң яҡшы хат ташыусыһы" Бөтөн Рәсәй һөнәри оҫталыҡ конкурсының төбәк этабында Салауаттан хат ташыусы Роза Ишкинина еңде. Конкурстың төбәк этабы Өфөлә уҙҙы. Еңеүсе Роза Ишкинина Башҡортостандың почта хеҙмәте исеменән Пермдә үтәсәк конкурстың округ этабында сығыш яһаясаҡ. "2014 йылдың иң яҡшы хат ташыусыһы" Бөтөн Рәсәй конкурсының финалы Рәсәй почтаһы көнө алдынан, июлдең икенсе йәкшәмбеһе Мәскәүҙә үтәсәк.

✓Республика Президенты Указы менән башҡорт шағиры һәм яҙыусы Ирек Кинйәбулатов Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде. Ирек Кинйәбулатов Зәйнәб Биишева, Сергей Чекмарев, Рәми Ғарипов, Фәтих Кәрим, Мәжит Ғафури, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Назар Нәжми исемендәге әҙәби премиялар лауреаты. 2008 йылда шағир Салауат Юлаев исемендәге БР Дәүләт премияһы лауреаты исеме алғайны.

**"Башинформ"дан.**

СӘЙӘСӘТ

# ЙӘНӘШ ҠАЛЫПТАР

**Рәсәйҙең ике субъектҡа артыуы шул тиклем ҙур тиҙлек менән башҡарылды, хатта былдай тиҙлекҡә аптырап, тел шартлатырға һәм, теләк булғанда, эшләй алабыҙ бит, тип әйтергә генә ҡала. Беҙҙең өсөн шуныһы мөһим: ниһайәт, ил башлығы ауыҙынан милләттәрҙең һәм халыҡтарҙың үҙбилдәләнеш хоҡуғы танылды! Юҡһа, быға тиклем Рәсәй сәйәсмәндәре был халыҡ-ара хоҡуки акттарҙа сағылыш тапҡан норма тураһында телгә алмаҫҡа тырыша ине бит.**

Парламентарийҙар алдында сығыш яһап, ил Президенты Владимир Путин: "Ҡырым татарҙары үҙ тыуған еренә ҡайтты. Рәсәй уларҙың дөйөм йорто, бәләкәй тыуған иле һәм әгәр Ҡырымда өс тиң хоҡуҡлы рус, украин, ҡырым татарҙары теле дәүләт теле булараҡ ҡабул ителһә, ғәҙел буласаҡ, - тине. Рустарҙы тарихи хәтерҙән, ҡайһы берҙә телдән мәхрүм итергә тырышып ҡаранылар. - Әммә халыҡ тарихи ғәҙелһеҙлек менән килешергә теләмәне. Ошо йылдар һуҙымында граждандар һәм күпселек йәмәғәт эшмәкәрҙәре был теманы бер тапҡыр ғына күтәрмәне, Ҡырымдың - борондан рус ере, Севастополдең рус ҡалаһы булыуы хаҡында әйтә килде..." Әйтеү - бер, әйткәнде ишетеү - икенсе, күптәр алға һөрргәнде ғәмәлгә ашырыу - өсөнсө мәсьәлә. Ләкин был ябай ғына хәҡиҡәт һәр йәмғиәт, һәр милләт өсөн дә ярайлы түгел шул. Борон Башҡортостандың ерҙәре сикһеҙ булыуы, Оло Башҡортостан ерҙәре бөгөн дә күрше өлкәләр территорияһында ҡалыуы тураһындағы тарихты, мәҫәлән, кем таныр тиһең...

Ә шулай ҙа Ҡырымдың кире үҙ Ватанына ҡайтыуы яҡшы булды. Бер яңғайҙан, ҡайһы бер йәнәш ҡалыптар асыҡлана, кемдәрҙер таныҡға теләмәгән хоҡуҡтар яңынан ҡалҡып сыға. Унан һуң, һуңғы ваҡиғаларҙың донъя кимәлендә Рәсәйҙең абруйын арттырыуы, уның баһаһын күтәреүе лә яҡшы бит. Абруйлы илдә йәшәүгә ни етә! Ана бит, Көнбайыш күҙәтеүселәре Ҡырым өлгөһөнә Көнсығыш Европаның башҡа бәхәсле территориялары ла эйәреүе мөмкин тип күҙаллай. "Ведомости" гәзите хәбәр итеүенсә, Приднестровье РФ Дәүләт Думаһына Рәсәйгә яңы территорияларҙы ҡабул итеү нигеҙен киңәйтеүҙе һорап мөрәжәғәт иткән дә инде. Дәүләт Думаһы ҡарауынан был закон проекты алынған, тиһәләр ҙә, "Ғәҙел Рәсәй" фракцияһы Рәсәй Федерацияһына башҡа илдәрҙең территорияларҙың да ҡабул ителеү мөмкинлеген иҫәпкә алып, документтың Дәүләт Думаһына ҡабаттан тәҡдим ителәсәген вәғәҙә итә. Былтыр Приднестровье парламенты ерлек әҙерләй башланы ла инде: республика территорияһында Рәсәйҙең федераль законларын ғәмәлгә индереүсе закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Шулай уҡ рус теле дәүләт теле тип танылды. Һуңғы ваҡиғалар фонында елдең ҡайһы яҡҡа иҫеүен тиҙ тоҫмаллаған һәм Приднестровьены үҙ территорияһы тип иҫәпләгән Молдова парламенты тиҙ генә дөйөм республика темалары буйынса уғындарҙы референдумдар үткәреүҙе тыйыусы закон сығарып та ҡуйҙы. Сөнки ғағауыҙлар, Молдованың ЕС-ҡа инеүенә ҡаршылыҡ белдереп һәм ул үҙенең бойондороҡһоҙлоғон юғалтҡан хәлдә, Молдова составынан сығыу өсөн тауыш бирепн, референдум үткәргән. Үрмәксенән - күрмәксе, тигәндәй, хатта Каталония Испаниянан айырылып үҙ аллылыҡ алырға ниәтләй икән...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ФЕКЕРЛӘШЕҮ ҠОРҘАРЫ

# ИКЕ ЯҠЛЫ КИЛЕШЕҮҘЕҢ...

## ыңғай булһын һөҙөмтәһе, тип



**БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Парижда ЮНЕСКО-ның штаб-фатирында булды.**

Лилиә Ғүмәрова ЮНЕСКО-ның эске бәйләнештәр һәм йәмәғәт мәғлүмәте буйынса генераль директоры урынбаҫары Эрик Фальт, Бөтөн донъя мираҫ үҙәге директоры Кишор Рао һәм ойошма эксперттары менән осрашты. Улар былтыр октябрҙә Башҡортостандың ЮНЕСКО-ның штаб-фатирында үткәрелгән презентацияһы йомғаҡтары буйынса, БР Президенты Рөстәм Хәмитов һәм ЮНЕСКО-ның Генераль директоры Ирина Бокова ҡул ҡуйған ике яҡлы Коммюнике сиктәрендәге саралаҙың бойомға ашырылыу барышы тураһында һөйләште. Шулай уҡ Республика Президенты саҡырыуы буйынса Ирина Бокованың мәҙәни мираҫ объекттарына һәм Башҡортостандың белем биреү учреждениеларына сәфәрен ойоштороу мәсьәләләре ҡуҙғатылды.

Лилиә Ғүмәрованың Бөтөн донъя мираҫ үҙәге директоры Кишор Рао, шулай уҡ ЮНЕСКО эксперттары менән осрашыуы барышында яҡтар башҡорт номинацияһын - "Башҡорт Уралы" биомөхит резерватын Бөтөн донъя мираҫ исемлегенә индереүҙе әҙерләүҙе дауам итергә килеште. Кишор Рао Рәсәй яғынан мөрәжәғәт булған осраҡта Бөтөн донъя мираҫы комитетының консультатив органдарынан башҡорт объекты потенциалын урынға барып өйрәнеү өсөн техник белгестәр йәлеп итеү мөмкинлеген раҫланы. Уның фекеренсә, уларҙың объект менән танышыуы һәм хуплауы Башҡортостандың тәбиғи-мәҙәни ҡомартҡыһын Бөтөн донъя мираҫ исемлегенә индереүҙе тиҙләтеүе ихтимал.

# ТАРИХ ЙЫЛЪЯҘМАБЫҘҘЫ...

## мәскәүҙәр ҙә хупланы

**Мәскәүҙә Башҡортостан Республикаһының РФ Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә "Башҡорт халҡының тарихы" ете томлыҡ монографияһының презентацияһы үтте.**



Сараны Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес Хисаметдинова асты, ә институт ғалимдарының береһе Булат Аҙнабаев проект тураһында тулыраҡ мәғлүмәт менән сығыш яһаны. Презентацияға федераль ғилми структуралар һәм академия институттарының ҙур даирә вәкилдәре, танылған тарих ғалимдары, атап әйткәндә, РФ Дәүләт Думаһы, Ғилми ойошмаларҙың федераль агентлығы, сит ил һәм илселек - Ҡаҙағстан, Төркиә, Венгрия, Рәсәй гуманитар ғилми фонды, Рәсәй фундаменталь тикшеренеүҙәр фонды, Н.Н.Миклуха-Маклай исемендәге Этнология һәм антропология институты, Рәсәй Фәндәр академияһының Рәсәй тарихы, дөйөм тарих, көнсығышты өйрәнеү, археология һәм телде өйрәнеү институты вәкилдәре саҡырылғайны. Йыйылыусылар был фундаменталь хеҙмәттең ҙур ғилми һәм мәҙәни-мәғариф әһәмиәткә эйә булыуын билдәләне, тип хәбәр иттеләр вәкиллектең матбуғат хеҙмәтенән.

**"БАШИНФОРМ".**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# СОЦИАЛЬ ПЕНСИЯ АРТА

**1 апрелдән Рәсәйҙә социаль пенсияларҙы 17,1 процентҡа арттырыу тураһында ил Хөкүмәтенең тейешле бойороғона ҡул ҡуйылған.**

Рәсәй бюджетында бының өсөн 40 миллиард һумдан ашыу аҡса ҡаралған. Индексациялау 3,7 миллион рәсәйлегә ҡағыласаҡ. Пособиелары социаль пенсия күләменә бәйле кешеләр өсөн өҫтәмәләр ҙә арттырыла. Былдай өҫтәмә түләүҙәрҙе Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙар, айырым ҡаҙанышлары һәм почетлы исемдәре булған ветерандар, реабилитацияланғандар, шулай уҡ хәрби хәрәкәттәр инвалидтары ала.

- Артыу күләме пенсионерҙың категорияһына ҡарата 94,71 һумдан 631,39 һумғаса тәшкил итәсәк. Арттырылған күләмдә пенсияны ағымдағы йылдың 1 апреленән республиканың 15 меңдән ашыу ветераны аласаҡ, - тип хәбәр итте БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат секретары Роза Кузьменко.

Хеҙмәт пенсияларына ҡағылғанда, ул 2014 йылдың 1 февраленән индексацияланды. Улар былтырғы ҡулланыу хаҡтарын иҫәпкә алып, 6,5 процентҡа артты, тип тә өҫтәнеләр министрлыҡта.

# АҠСАЛАТАМЫ, ӘЛЛӘ ДАРЫУЛАТАМЫ?

**Республикала бөгөн 364 мең тирәһе кеше федераль льгота хоҡуғына эйә. Быйыл 1 апрелдән улар өсөн тәғәйенләнгән айлыҡ аҡсалата түләү 5 процентҡа арттырыла.**

Быньң менән бергә социаль хеҙмәттәр өсөн бүлентән аҡса күләме лә артасаҡ. 1 апрелдән ул 881,63 һум тәшкил итәсәк. Шуның 679,05 һумы - бушлай дарыуҙар алыу, 105,05 һумы - санаторий һәм курорттарҙа дауаланыу, 97,53 һумы - ҡала эргәһендәге тимер юл транспортында бушлай йөрөү йәки бер ҡаланан икенсе ҡалаға дауаханаға барып ҡайтыу өсөн юл хаҡы итеп тәғәйенләнә.

Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, 2014 йылдың 1 апреленә ҡарата яһалған йомғаҡтар буйынса, граждандарҙың 71 проценты социаль хеҙмәт-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔ Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиллегенең конференция залында күренекле башҡорт яҙыусыһы-сатирасы, шағир-юморист Марсель Сәлимовтың Мәскәүҙә һәм Мәскәү өлкәһендә йәшәүсе яҡташтар менән осрашыуы уҙҙы. Залда ултырыусы билдәле яҙыусылар Йәмил Мостафин, Илгиз Кәримов, академик Тельман Әминев һәм башҡа күренекле яҡташтар, шулай уҡ баш ҡала ҡунаҡтары Марсель Сәлимовтың ижади һәм йәмәғәт эшмәкәрлеген юғары баһаланы.

✔ Өфөнөң Орджоникидзе районында "Феникс" Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү комплексы үҙәгендә оло йәштәге кешеләр өсөн "Надежда" "карттар баҡсаһы" эшләй башланы. Бында ҡала халҡы үҙҙәренең оло йәштәге туғандарын ваҡытлыса урынлаштыра ала. Хеҙмәт 30 көнгә тиклем алты кешене ҡарауға иҫәпләнгән. "Бүлексәлә медицина хеҙмәттәре, психологик ярҙам өсөн бүлмәләр ҡаралған. Ял итеүселәрҙе дүрт тапҡыр ашаталар", - тип хәбәр иттеләр Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән.

✔ Өфөнөң Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә 7-18 апрелдә эшһыуарлыҡ нигеҙҙәре буйынса түләүһеҙ курстар ойошторола. Курсҡа яҙылыу Өфө ҡалаһы, Ибраһимов бульвары, 47/1 адресы буйынса йәки (347) 251-51-83 телефоны буйынса атҡарыла.

✔ Рәсәй Президенты апрель-июль айҙарында егеттәрҙе хәрби хеҙмәткә саҡырыу һәм хәрби хеҙмәт үткәндәрҙе ҡайтарыу тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Быйыл хәрби хеҙмәткә Рәсәйҙең 18-27 йәштәге 154 мең граждыны саҡырыласаҡ. Башҡортостандан быйыл яҙ 5800-ләп егет армияға китәсәк. Былтыр белем алыу һәм сәләмәтлектәре ҡаҡшау сәбәпле 20 мең кешегә армияға саҡырыу кисектерелгән булған.

✔ 31 марттан алып Башҡортостандың Күп функциялы үҙәгенең бөтә филиалдары һәм бүлексәләре яңы график буйынса эшләйәсәк. Дүшәмбе 14 сәғәттән алып 20 сәғәткә тиклем, шишәмбе-шәмбе 8 сәғәттән алып 20 сәғәткә тиклем граждандарҙы ҡабул итеү ойоштороласаҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Башҡортостан Республикаһының "Ҡатын-ҡыҙҙар парламент клубы" инициативаһы менән булдырылған "Йәштәргә - сәләмәтлек!" социаль проекты, хәҙер тарихта ҡалып, инде онотола барған "Йәштәргә бөтөн ерҙә юл асыҡ!" тигән лозунгыны хәтергә төшөрҙө. Эйе, совет осоронда һүҙ эш менән тап килә ине, ләкин йылдар үтеү менән ул бары тик лозунг булып ҡына ҡалды. Әммә барлыҡ юлдар асыҡ булған ваҡытта ла йәштәрҙең сәләмәтлеге һәр саҡ күҙ уңынан ысҡындырылды.**



# ЙӘШ БЫУЫНДЫ...

## һау итергә, тип

Бәлки, элек магазин кәштәләрендә төрлө суррогаттар, ГМО ҡушылған аҙыҡ-түлек тулып ятмағанда, халыҡ, нигеҙҙә, сифатлы, экологик яҡтан таҙа продукция ҡулланғанда бындай проблема булмағандыр ҙа. Хәҙер тормош та яҡшырҙы, етештереү ҙә алға китте, медицина ла яңы кимәлгә күтәрелде, сәләмәт тормош киң пропагандалана, тик үҫеп килеүсе быуындың, киләсәктең нигеҙен тәшкил иткән йәштәребеҙҙең генә сәләмәтлеге борсоуға һалыуҙан туҡтамай. Йыл һайын үҫмерҙәр араһында ауырығандар һаны 6-8 процентҡа арта бара. Ентекле профилактик тикшереү үткәрелгән 14 йәшлек үҫмерҙәрҙең 57 процентында төрлө сирҙәр беренсе тапҡыр асыҡлана. Ә бит үҫешкән илдәрҙең тәжрибәһе күрһәтеүенсә, бары тик профилактик саралар ярҙамында ғына халыҡтың сәләмәтлегенә йоғонто яһарға, дөйөм үлем күрһәткесен 10-20 йылда ике һәм унан да күберәккә кәметергә мөмкин. Ләкин Социаль фаразлауҙар үҙәге үткәргән һорау алыу мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, Рәсәйҙең 18 субъектында йәштәрҙең 67 проценты хатта Сәләмәтлек үҙәктәре барлығы һәм уларға мөрәжәғәт итеп, һаулыҡ торошон асыҡларға мөмкин икәнлеге хаҡында хәбәрҙар түгел. Ә бит бындай үҙәктәр "Сәләмәтлек" өҫтөнлөклө милли проектына ярашлы 2009 йылдан алып ойошторола. Бөгөн Рәсәйҙә барлығы шундай 704 үҙәк эшләй, шул иҫәптән республикала - 17. Өфөлә иһә 2-се, 38-се, 46-сы поликлиникалар базаһында - ололар өсөн, ә 5-се һәм 8-се Ҡала балалар поликлиникалары нигеҙендә балалар өсөн Сәләмәтлек үҙәктәре асылған.

Ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт медицина университетында ойошторолған исем туйында РФ Дәүләт Думаһының Һаулыҡ һаҡлау буйынса комитет ағзаһы, "Ҡатын-ҡыҙҙар парламент клубы" ижтимағи ойошмаһының төбәк советы рәйесе, социаль проекттың координаторы Сәлиә Мырҙабаева башланғысҡа рәсми рәүештә старт бирҙе. Хәҙер "Йәштәргә - сәләмәтлек" проектын баш ҡалала уҡыусы юғары уҡыу йорттары студенттары ғәмәлдә һынап ҡарау мөмкинлегенә эйә. Хәйер, бындай эшмәкәрлек вуздар өсөн ят түгел, уларҙың һәр ҡайһыһында профилакторийҙар элек-электән эшләп килә. Әммә быйылдан БДМУ талиптары 46-сы поликлиниканың Сәләмәтлек үҙәгендә тикшерелә. Киләһе йылдан Өфөнөң барлыҡ юғары уҡыу йорттарында белем алыусылар ҙа үҙәктәрҙә тикшерелеү мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Артабан инде был проектты баш ҡаланың урта һөнәрселек белем биреү уҡыу йорттарына, республиканың башҡа район-ҡалаларына таратыу күҙаллана.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

---

тәрҙе аҡсалата алыуҙы хуп күрә. Әммә яңы законға ярашлы, социаль хеҙмәттәр алыу хоҡуғы булған пенсионерҙар тәҡдим ителгән хеҙмәттәрҙән тотошлай йәки өлөшләтә баш тартыуы тураһында, йәиһә уны әйберләтә алырға ризалыҡ биреп, 2014 йылдың 1 октябренә тиклем ғариза яҙып тапшырырға тейеш.

**РФ Пенсия фондының БР буйынса идаралығы матбуғат хеҙмәте**

# СИКЛӘҮҘӘР БӨТӨРӨЛДӨ

**Рәсәй авиацияһы 2 апрелдән алып ҡул йөгөндә шыйыҡса йөрөтөүгә сикләүҙе бөтөрҙө.**

Хәҙер пассажирҙарға үҙҙәре менән бортҡа 100 миллиграмдан күп булмаған һыйҙырышлы һауытта шыйыҡса алырға рөхсәт ителә. Бынан тыш, ҡул йөгөндә пластик пакетҡа төрөлгән, асылмаған шыйышлыҡтар йөрөтөргә була, тип хәбәр итә "Өфө" Халыҡ-ара аэропортының матбуғат хеҙмәте. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, һауа судноларында шыйыҡса йөрөтөүгә тыйыу 2014 йылдың ғинуарында индерелгәйне. Пассажирҙар бөтә шыйыҡсаларҙы ла, шул иҫәптән биҙәнеү әйберҙәре, медикаменттар, аэрозолдәр, шыйыҡсалар һәм гелдәрҙе багажға тапшыра ине. Дарыуҙарҙы авиация хәүефһеҙлеге белгестәре тикшергәндән һуң ғына бортҡа алырға ярай ине. Әле был сикләүҙәр бөтөрөлгән.

# ТАҒЫ ЯЛ ИТӘБЕҘ...

**Республика халҡын өҫтәмә ял көндәре көтә. Байрамдар менән бәйле 2014 йылдың 1, 2, 3, 4 һәм 9, 10, 11 майы ял көндәре булып иҫәпләнә.**

Эш оҙайлығы шаршамбы 30 апрелдә һәм кесе йома 8 майҙа бер сәғәткә ҡыҫҡартыла, тип хәбәр итәләр республиканың Хеҙмәт министрлығынан. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 1 май - Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы һәм 9 майҙа Еңеү көнө ял көндәре булып иҫәпләнә. Ял көндәрен һәм эшләмәгән байрам көндәрен рациональ файҙаланыу маҡсатында ял көнө шәмбе 4 ғинуарҙан йома 2 майға күсерелгән. Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт кодексына ярашлы, йыллыҡ төп һәм йыллыҡ өҫтәмә түләүле отпуск биргәндә 1 һәм 9 майҙа эшләмәгән байрам көндәре отпускының календарь көндәре иҫәбенә индерелмәй.

---

БОРСОУЛЫ ХӘЛ

# МАХСУС ҮҘӘКҺЕҘ БУЛМАЙ...

**Бөгөн кешенең иммун дефициты вирусы тыуҙырған инфекция көнүҙәк һәм социаль хәүефле сир булып тора. Тотош Рәсәйҙәге, Башҡортостандағы кеүек, Өфөлә лә эпидемиологик хәл-торош йылдан-йыл ҡатмарлаша бара: барлыҡ профилактик сараларға ҡарамаҫтан, ВИЧ-инфекциялылар һаны арта. Был хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Ҡулланыусылар хоҡуғын һәм кеше именлеген яҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Нәсимә Күсемова белдерҙе.**

2013 йыл һуңында республикала 13,5 мең ВИЧ-инфекциялы кеше иҫәптә тора, шуларҙың 4 меңдән ашыуы (32 проценты) - өфөләләр. Былтыр ғына был һан 854 яңы кешегә (17 осраҡта 17 йәшкә тиклемге балалар) арта. ВИЧ-инфекция күрһәткестәре буйынса республикала Салауат ҡалаһы алда бара, икенсе булып Өфө тора. Быйыл ғына баш ҡаланың Калинин районында - 101, Ленин районында - 93, Орджоникидзе районында 91 осраҡ теркәлгән. Шуларҙың 63 процентын көслө зат вәкилдәре тәшкил итә. Республика буйынса был сирҙе енси юл аша йоҡторһалар, Өфөлә - зарарланған наркотик матдәләр ҡулланыу һөҙөмтәһендә эләктерәләр. Оло йәштәгеләр араһында ла ВИЧ-инфекциялыларҙың артыуы күҙәтелә. 2006 йылда 31-46 йәшлектәр араһында зарарланыусылар 22 процент булһа, былтыр был күрһәткес 49 процентҡа еткән. Ә 41-50 йәшлектәр барлыҡ ВИЧ-инфекциялыларҙың дөйөм һанының 10 процентын тәшкил итә. Социаль структурала ВИЧ-инфекциялылар араһында хеҙмәт йәшендәге эшһеҙҙәр 60 процент алып тора.

ВИЧ-инфекцияны профилактикалауҙа мөһим йүнәлеш булып диагнозды ваҡытында билдәләү, аңлы рәүештә инфекция тараткан өсөн ауырыуҙарҙың хоҡуҡтарын административ һәм енәйәт кодексы буйынса сикләү тора. Былтыр ҡаланың 295 мең кешеһе (2012 йылға ҡарағанда 6 процентҡа күберәк) ВИЧ-инфекцияға тикшереү үткән. Хәүеф төркөмөнә инеүселәрҙе тикшереү даирәһе бер ни тиклем кәмеһә лә, улар араһында ауырыуҙарҙы асыҡлау күрһәткесе наркотиктар ҡулланыусылар араһында - 3,3 тапҡырға (9 процент), венерологик сирлеләр араһында - 3 тапҡырға, ВИЧ-инфекция йөрөтөүселәр менән бәйләнештә булыусылар араһында 1,5 тапҡырға артҡан. Баш ҡаланың ВИЧ-инфекциялы граждандарының 87 проценты диспансер күҙәтеүенә алынған. Был күрһәткестең 100 процент булмауы инфекция йөрөтөүселәрҙең диспансер күҙәтеүенән ҡасып йөрөүе һәм табип-инфекционистарҙың, эпидемиологтарҙың етешмәүе менән аңлатыла.

Нәсимә Күсемова белдереүенсә, ҡала масштабында профилактика саралары спектры булыуға ҡарамаҫтан, халыҡҡа мәғлүмәт еткереү буйынса яйға һалынған сәйәсәт булмауы күҙаллаған һөҙөмтәгә өлгәшеү мөмкинлеген бирмәй. Бында инде Өфөлә ВИЧ-инфекцияны профилактикалау һәм уның менән көрәш үҙәге, шулай уҡ ҡала маҡсатлы программаһын әҙерләү кәрәклеге күҙ уңында тотола. 1989 йылдан баш ҡалала ошо йүнәлештәге республика үҙәге эшләп килһә лә, ул Өфө буйынса күҙәтелгән көсөргәнеште күтәрә алмай. Кәңәшмә һуңында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үҙәк булдырыу мәсьәләһенең яҡын арала ведомство-ара кәңәшмәлә ҡараласағын һәм, "Әгәр кәрәк икән, Өфөлә ундай үҙәк буласаҡ", тип белдерҙе.

---

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡолаҡ ишетмәһә

❖ Һарыҡ үте - 2 өлөш, һарымһаҡ һуты - 1 өлөш. Ошо компоненттарҙы ҡушып болғатып, эренләп шешкән ҡолаҡҡа ҡуйырға, иртәле-кисле ҡолаҡҡа тамыҙырға.

❖ 30 грамм артыш еләген 100 грамм араҡыла 10 көн төнәтергә, һөҙөргә. Һәр көн һайын кис мамыҡты манып, 2-3 сәғәткә ҡолаҡҡа ҡуйырға. Йылыраҡ булһын өсөн, ҡолаҡ тишегенә тағы ла өҫтәп мамыҡ ҡуйырға.

❖ Мәтрүшкә һутын һәм 10 процентлы һеркәне бермә-бер миҡтарҙа ҡатнаштырып, ишетмәгән ҡолаҡҡа көнөнә 3 тапҡыр 3-әр тамсы тамыҙырға.

❖ Яңы тотолған балыҡты утта тотоп, майын сығарырға һәм шул майҙы 3 көн буйына көнөнә 3 мәртәбә 3-әр тамсылап ҡолаҡҡа тамыҙырға. Дауаланыу осоронда һыуыҡтан, үтәләй өргән елдән ныҡ һаҡланырға.

## Тәмле дауа

❖ Иммунитетты күтәреү өсөн 1,5 стакан йөҙөм йәки күрәгә, 0,5 стакан миндаль сәтләүегә, 2 лимон ҡабығын ит турағыстан үткәрергә, өҫтөнә лимон һутын һығырға һәм 1 стакан иретелгән бал ҡушып болғатырға. 1-2 көн ҡараңғы урында тоторға, көнөнә 3 мәртәбә ашарҙан 1 сәғәт алда 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

## Йоҡлай алмаһаң

❖ 100 грамм ваҡланған энәлек емешенә 500 мл һыу ҡойоп, һүрән утта 30 минут ҡайнатырға, һыуынғас, һөҙөргә. Көнөнә өс мәртәбә ашағандан һуң 50-100 мл эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

## Гломерулонефрит

Гломерулонефрит - ике яҡ бөйөрҙөң дә тотош шешеүе. ❖ 60 грамм һары мәтрүшкә, 140 грамм кесерткән, 120 грамм кукуруз сүсе, 70 грамм йүкә сәскәһе, 80 грамм аҡ сәскә, 40 грамм ала миләүшә (фиалка трехцветная), 50 грамм ҡомалаҡ, 130 грамм эт дегәнәге (череда), 240 грамм гөлйемеш. Үләндәрҙе ваҡларға, болғатырға. 2 ҡалаҡ ҡатнашмаға 500 мл ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнө буйы термоста тоторға. Өс өлөшкә бүлеп эсеп бөтөргә. 6 көн эскәндән һуң 7 көн ял итергә. Дауалау курсы - 3 ай.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ Ярыштың ҡалыпҡа һалына башлауы эсте бошора. Был ҡалыплашыу конкурсанттар үҙҙәренең инновацион эш тәжрибәһе менән уртаҡлашҡанда бигерәк тә асыҡ сағылды.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠАРҒА БУТҠАҺЫ

**Башҡорттарҙың йыл әйләнәһенә башҡарыла торған йолалары ла күп. Улар халыҡ тарафынан билдәләнгән мәлдә йәки ғәҙәттән тыш хәлдәр (ҡоролоҡ, үләт, ауыруҙар һәм башҡалар) ваҡытында уҙғарылған. Күпселек аш табыны йолаларында исламға тиклемге ышаныуҙар яҡшы һаҡланған.**

Тәүге яҙғы байрам - ҡарға бутҡаһы (йәки ҡарға туйы) булған. "Ҡарғатуй" тип республиканың үҙәк өлөшөндә һәм шулай уҡ көнсығыш һәм Урал арьяғы башҡорттарында әйтәләр. Ә Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш, көньяҡ, көньяҡ-көнсығыш ауылдарында һәм Ырымбур өлкәһе башҡорттарында был байрам күберәк "Ҡарға бутҡаһы" исеме аҫтында билдәле. Байрамды, ғәҙәттә, йәйләүгә сыҡҡанға тиклем, ҡарғалар ҡайтҡас, ер бер аҙ ҡарҙан әрселеп, ашарға яраҡлы тәүге йәшел үлән ҡалҡҡас уҙғарғандар. Был йола тәбиғәттең ҡышҡы йоҡонан уяныуын сәләмләү кеүек булған. Ултыраҡ тормошҡа күскән башҡорттарҙа иһә ҡарға туйы күберәген сәсеү бөткәс билдәләнгән һәм уның төп маҡсаты ямғыр яуыуын һәм яҡшы уңыш теләү булған.

Ҡарға туйын иртә яҙҙа билдәләгән көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында был йоланың һәм йола ашының һауа торошо һынамыштары менән бәйләнеше һаҡланып ҡалған. Байрам алдынан балалар һәм үсмерҙәр: "Ҡарғатуйға бар, бар! Ярма, ҡуҡай алып бар, бар!" тип ҡысҡырып, ауыл буйлап йөрөп, май, һөт аҙыҡтары, йомортҡа, шәкәр, сей, ярма йыйған. Икенсе көндө иртә менән ҡатын-ҡыҙҙар самауыр, ҡаҙан тотоп, көйәнтәгә биҙрәләр элеп, ауыл халҡынан йыйылған аҙыҡ-түлекте алып, байрам үткәреләсәк урынға - баҫыуға, йылға ярына, ҡалҡыулыҡ итәгенә, тауға киткән. Ҡайһы бер яҡтарҙа байрамға эргә-тирәләге ауылдарҙан ҡунаҡтар ҙа саҡырылған. Ғәҙәттә, ҡарға туйына ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар сыҡҡан.

Тәғәйен урынға килеп еткәс, ҡатын-ҡыҙҙар усаҡ яҡҡан, самауыр ҡуйған, ашъяулыҡ йәйгән. Ҡайһы саҡта ололар бер аҙ ял итеп алһын өсөн ҡыуыш эшләгәндәр йәки бәләкәй генә тирмә ҡорғандар. Был ваҡытта ағастарҙың япрағы әҙ булыу сәбәпле, ботаҡтарҙы төрлө төҫтәге таҫма һәм ҡыҫҡындылар менән биҙәгәндәр (ағас туҡлау). Унан һуң бутҡа бешереүгә тотонғандар. Олораҡ ҡатын-ҡыҙҙар түңәрәккә ултырып, әңгәмә ҡорған, буласаҡ уңыштың мул булыуын, мал-тыуарҙың үрсем биреүен теләп доға ҡылған. Урал арьяғы ауылдарында был байрамда башына ҡайын туҙынан эшләнгән кейем кейгән махсус юлбашсының булыуы хаҡында ла мәғлүмәттәр бар. Һыйхөрмәт әҙерләүҙә ҡатнашмаған йәш ҡыҙҙар ҡумыҙ йәки башҡа халыҡ ҡоралдарында уйнап йырлаған, биҙрәгә уймаҡ менән сиртеп бейегән, әйлән-бәйлән уйнаған, ҡоштарға арналған йырҙар йырлаған. Айырыуса "Ҡарға бутҡаһы" һәм "Алырым ҡош" уйындары үҙенсәлекле булған. Тәүгеһендә баласаға ҡарғалар булып ҡыланып, бутҡа бешеп ултырған ҡаҙанды урлаған. Ғалимә Лидия Нагаева Ишембай районында "Ҡарға бутҡаһы" бейеүенең йыр менән оҙатылып килеүе хаҡында яҙа.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

# БӘЙГЕНЕҢ ҠИММӘТЕ...

## алған фәһем, һабаҡтар менән үлсәнә

**(Башы 1-се биттә).**

Эйе, бәйгеләрҙең еңеүсеһе лә, еңелеүсеһе лә була. Ә шулай ҙа еңеүселәр өсөн дә, ҡатнашыусылар өсөн дә иң ҡиммәтлеһе барыбер ҙә унда алған һабаҡ, тәьҫорат һәм фәһемдәр, моғайын. Шул турала баһалама ағзалары менән һөйләшкәндәрҙә, ҡайһы бер һығымталарыбыҙҙы еткерәйек әле. Барыбыҙға ла билдәле булыуынса, "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсы республикабыҙҙа туған телдә өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүленгән осорҙа үткәрелә башланы. Бөгөн иһә был иғтибар бер аҙ кәмей төшкән, ауылдарҙа мәктәптәрҙе оптималләштереү процесы һөҙөмтәһендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән белем биреүсе күп педагогтар эшһеҙ ҡалған осор. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бәйгелә ҡатнашыусыларҙың кәмемәүе шатландыра. Быйыл иң алдынғы уҡытыусы исеменә 55 педагог көс һынашты. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу буйынса тәжрибә уртаҡлашыу, фекер туплау маҡсаты менән педагогтар республиканың төрлө төбәктәренән йыйылғайны. Әлбиттә, исемлектә республиканың ҡайһы бер районлары теркәлмәне. Был турала БДУ профессоры, жюри ағзаһы Ғиниәтулла Ҡунафин бына ниндәй фекерҙә: "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсы формаль ярыш түгел, береһен дә ирекһеҙләп, фарман биреп килтермәйбеҙ. Әммә был конкурс бөгөнгө көндә башҡорт теле уҡытыусыларының, ғөмүмән, башҡорт интеллигенцияһының йәмғиәттәге бәсен, ижтимағи ролен үҫтереүҙә ҡуҙаллай. Шуға күрә, мәҫәлән, Илеш районынан ҡатнашыусы кеше булмауы - был төбәктә башҡорт телен туған тел, дәүләт теле булараҡ уҡытҡан уҡытыусыларҙың хеҙмәтен халыҡ алдына сығарыу буйынса эш алып барылмай икән, тигән фекер тыуҙыра. Республика кимәлендә уҙғарылған бындай масштаблы ярышта ҡатнашыусыға бер уҡытыусы ла лайыҡ тип табылмаған икән, тимәк, райондың мәғариф бүлеге мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуға тейешенсә иғтибар бүлмәй, тигән һығымтаға киләм. Һөҙөмтәлә, илештәр коллегалары менән фекер алышыу, тәжрибә уртаҡлашыуҙан мәхрүм ҡалды. Киләсәктә ошондай һүлпәнлек, битарафлыҡ күрһәтелмәҫ, милләттәштәребеҙ бынан ниндәйҙер фәһем алыр, фекер туплар, тип уйлайым..."

Конкурста бер генә ир-ат уҡытыусы ла ҡатнашмауҙан тыуған үкенесте иҫәпкә алмағанда, быйылғы бәйге һөҙөмтәләренән бик күптәр ҡәнәғәт ҡалды. Мәҫәлән, 90-сы йылдарҙа үткәрелә башлаған конкурстың башынан алып тиерлек баһалама ағзаһы булып ҡатнашҡан профессор Мирас Иҙелбаев әйтеүенсә, уҡытыусыларҙың ғилми базаһы элекке йылдарҙағыға ҡарағанда һиҙелерлек үҫкән. Уның фекеренсә, быға педагогтарҙың туған телдәрҙе уҡытыу буйынса донъя кимәлендә билдәлелек яулаған ғалим, коллегаларының эштәре менән интернет селтәре аша таныша алыу, белем уртаҡлашыу мөмкинлеге йоғонто яһай. Шулай ҙа профессор конкурсанттарҙың оҫталыҡ дәрестәрендә күрһәткән эштәре менән ҡәнәғәт булмауын белдерҙе: "Ғилми эштәргә таянып, тикшеренеүҙәр үткәреп, ниндәйҙер һығымталар яһап, фәнгә нигеҙләнгән уҡытыу методикаһын тәҡдим итеүселәр һирәк әле", - тине ул. Профессорҙың был фекере менән башҡалар ҙа килешә. Мәҫәлән, 2012 йылда "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсында Гран-при яулаусы Ишембай ҡалаһынан Рифат Әюпов та шундай фекерҙә. "Инде ике тиҫтә йыл самаһы үткәрелгән ярыштың ҡалыпҡа һалына башлауы эсте бошора. Был ҡалыплашыу конкурсанттар үҙҙәренең инновацион эш тәжрибәһе менән уртаҡлашҡанда бигерәк тә асыҡ сағылды. Инновацион эш тәжрибәһе - ғилми яҡтан өйрәнелгән, көндәлек эш барышында ҡулланыуға индерелгән, ниндәйҙер һөҙөмтәләр килтергән, әммә күптәр тарафынан яңылыҡ итеп ҡабул ителерҙәй эш проекты. Аңлатыу эштәре алып барылһа ла, коллегаларым алдарына ҡуйылған ошо бурысҡа һаман төшөнөп етмәй, ахыры. Сөнки быйыл да күптәре үҙҙәре хаҡында һөйләне, ҡайҙа, ниндәй конкурстарҙа ҡатнашыуы, ниндәй түңәрәктәр етәкләүе тураһында бәйән итте. Шуға күрә, миндә ҡайһы бер жюри ағзалары ла инновацион эш тәжрибәһе нимәнән ғибәрәт булыуын аңламай, конкурсанттар ҙа тейешле яңылыҡ, тәжрибә килтермәй, тигән фекер ҡалды. Үрҙә әйтеп үтелгәнсә, инновацион эш тәжрибәһе урынына коллегаларымдың уныштарына һөйөнөп, ниндәй конкурстарҙа ҡатнашыуҙарын тыңлап ултырҙым да, тағы ла шундай һығымтаға килдем - нимә генә тимә, улар Рәсәй, халыҡ-ара кимәлдә үткәрелгән конкурстарҙа һирәк ҡатнаша икән. Татар теле уҡытыусыларының хеҙмәттәре ҙурыраҡ масштабтарҙа үткәрелгән ярыштарҙа, конференцияларҙа баһаланғанда, беҙ үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнап ятабыҙ һымаҡ..." - тигән әсенеүен белдерҙе Рифат Ғаяз улы.

Ә баһалама комиссияһы ағзаһы Фәнзил Саньяров быйылғы конкурстан бик ҡәнәғәт ҡалыуын билдәләп, хаталар өҫтөндә эш алып барыуҙың ҡайһы бер һөҙөмтәләрен күрһәтте: "Күп тапҡыр иҫкәрмәләр эшләй торғас, баһалама комиссияһы ла үҙ фекерен, үҙ баһаһын бөтөн халыҡ алдында асыҡ белдерә башланы..." Уның әйтеүенсә, "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" ярышы быйыл яңы һулыш алған - ул асыҡлана төшкән. Тимәк, ойоштороусылар ғәҙеллекте көсәйтеләр, һүҙҙәре ишеткән. Улар шулай уҡ конкурсты финанс яғынан күтәрмәләү буйынса ла күп көс һалған, төрлө бағыусылар йәлеп иткән, ҡатнашыусыларға бүләкте алдан әҙерләгән, тантана өлөшөн юғары кимәлдә үткәреү өсөн дә тырышҡан. Конкурстан алынған фәһем, тәжрибә, абруйлы баһалама комиссияһы ағзалары еткергән фекерҙәр иҫәпкә алынмай ҡалмаҫ, моғайын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә балалар туған телдең нескәлектәренә төшөнөп, күренекле әҙиптәрҙең ижад емештәре менән танышып ҡына ҡалмай, башҡорт халҡының мәҙәниәте, көнкүреш-йолалары, рухи ҡиммәттәрен дә күңеленә һеңдереп ултыра. Балаларҙың рухи талаптарын ҡәнәғәтләндереү өсөн ең һыҙғанып эшләгән, һәр дәресен ҡыҙыҡлы итеп үткәреү өсөн эҙләнеүҙәрҙән туҡтамаған, яңылыҡтарҙан ҡурҡмаған уҡытыусылар кәрәк. Беҙҙең республикабыҙҙа бындай мөғәллимдәр бына инде 19 йыл рәттән үҙҙәрен халыҡҡа күрһәтә, тәжрибәһе менән уртаҡлаша килә килеүен. Шулай ҙа, конкурстың киләле артабан ниндәй хәлдә булыры үҙебеҙҙең ҡулда икән, уйланырға ла урын бар кеүек.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



✓ *Идея-сәйәси яҡтан башҡорттар үҙбилдәләнеш хоҡуғы өсөн көрәшә. Был хоҡуҡ бөгөнгө көндә донъя йәмәғәтселеге тарафынан рәсми рәүештә танылған халыҡ-ара норма булып тора.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Башҡорт дәүләт университетында Үҙәк Совет власының Башҡорт автономияһын рәсми рәүештә таныуына 95 йыл тулыу айҡанлы ғилми-ғәмәли конференция үтте. Университеттың тарих факультеты ойошторған сарала ошо тарихи ваҡиғаның әһәмиәте, уның башҡорт халҡының, республиканың һәм Рәсәйҙең үҫешенә йоғонтоһо тураһында, шулай уҡ Башҡортостан тарихының төрлө осорҙарына һәм дәүләт-йәмәғәт мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы докладтар тыңланды. Гәзит уҡыусыларҙы конференцияла яңғыраған ҡайһы бер фекерҙәр менән таныштырабыҙ.**

# ДӨМ ҠАРАҢҒЫЛЫҠ ОСОРОНДА...

## Башҡортостан төньяҡ йондоҙолай булды

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы:** Совет власының Башҡорт автономияһын юридик яҡтан таныуы башҡорт халҡы тарафынан ҙур шатлыҡ менән ҡабул ителә. Был, ысынлап та, башҡорттар тормошонда ғәйәт ҙур ваҡиға була. Социаль-иҡтисади юҫыҡтағы проблемаларҙы хәл итеү, милли мәҙәниәтте күтәреү, башҡорттарҙы берләштереү, туплау өсөн уңайлы шарттар барлыҡҡа килә. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: Совет дәүләтенең Башҡортостан автономияһын таныуы халыҡ-ара билдәлелек ала. Быны 1920 йылдың март айында БАССР-ҙың баш ҡалаһы Стәрлетамаҡҡа билдәле Һиндостан мосолман йәмәғәт эшмәкәрҙәре - Көнсығыш халыҡтарын Көнбайыш илдәрҙең колониаль иҙеүенән азат итеү идеяһы менән янып йөрөүсе Мәүләүи Бәрәкатулла менән Ғәбделбәрҙең килеүе раҫлай. Ошо хаҡта Ә. Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә телгә алып үтә. "Һинд ҡунаҡтары Урал тауҙары араһында ислам дәүләте төҙөлөүгә ҡыуанды. Улар "Башҡортостан бар Төркөстан территорияһындағы мосолман дәүләтенең үҙәге буласаҡ", тип ышана ине. Ошо күҙлектән сығып, коммунистар менән дә хеҙмәтләшлек итергә әҙерҙәр ине", тип яҙа Әхмәтзәки Вәлиди. Ул һинд ҡунаҡтарына "Ҡөрьән менән коммунизмды бәйләү үҙе үк гонаһ һәм Советтар менән һөйләшеүҙәр алып барғанда динде ҡыҫтырмаҫҡа кәрәк", тигән кәңәш бирә. Шулай уҡ ҡаҙаҡ яҙыусыһы һәм ҡаҙаҡ милли хәрәкәтенең әүҙем ҡатнашыусыһы Мөхтар Әүәзов та Башҡорт автономияһының барлыҡҡа килеүенә ҙур баһа бирә: "Дөм ҡараңғылыҡ осоронда Башҡортостан беҙгә төньяҡ йондоҙ булып күренде..." - ти ул.

Шулай итеп, милли хәрәкәтте Октябрь революцияһына тиклем үк етәкләгән һәм марксистик идеологиянан йыраҡ булған башҡорт эшмәкәрҙәре Башҡортостан автономияһын иғлан итеүгә өлгәшә. Аңлашылыуынса, Үҙәк Совет власына, шул иҫәптән В. Ленинға башҡорт хәрәкәтенең лидерҙары оҡшап етмәй. Большевиктар уларҙы "буржуаз эшмәкәрҙәр", милләтселәр тип иҫәпләй һәм килешеүҙе лә ваҡытлы күренеш итеп кенә ҡарай.




Автономиялы Башҡортостандың Ә.Вәлиди төҙөгән картаһы.

**Лена СӨЛӘЙМӘНОВА, тарих фәндәре докторы:** Рәсәй составындағы Башҡортостандың милли дәүләтселек төҙөлөшөнөң хоҡуҡи нигеҙҙәре 1917 йылдың 15 ноябре менән даталанған 2-се һанлы Фарманда, 1920 йылдың 20 мартындағы Башҡорт хөкүмәте менән Совет власы араһындағы Килешеүҙә һәм БАССР-ҙың 1925 йылдағы Конституцияһында һалына. Был документтар һынылышлы революцион осорҙа беҙҙең төбәктәге халыҡтарҙың демократик үҫеш өсөн көрәше генә түгел, шулай уҡ милли мәсьәләне цивилизациялы юл менән хәл итергә тырышыуы өлгөһө лә. Улар (был документтар) федерализмдың бер нисә положениеһын нығыта. Унан һуң, үрҙә телгә алынған документта автономия лидерҙарының сепаратизм хәлен тыуҙырмаҫҡа тырышыуҙары ла асыҡ аңлашыла. Киреһенсә, Башҡорт хөкүмәте ағзалары автономия һәм Үҙәк власть араһында тарихи, иҡтисади, мәҙәни бәйләнештәрҙең тығыҙ булыуын күрә һәм уларҙы өҙөргә теләмәй. Шулай итеп, Башҡортостандың милли дәүләтселеге статусына рәсмиләштерелгәндә үк федерализм элементтары һалына. Улар (федерализм элементтары), совет дәүләтенең конституцион үҫеш тарихы күрһәтеүенсә, үҙҙәрен аҡлай, легитим була һәм конституционализм принциптарына ҡаршы килмәй. Шуға күрә лә федерализм, күп милләтле дәүләттең демократик үҫеш моделе булараҡ, бөгөнгө Рәсәйҙең төп законының беренсе статьяһында нығытылған.

**Салауат ҠАСИМОВ, тарих фәндәре докторы:** Башҡорт халҡы үҙ милли дәүләтселеген - Башҡортостан автономияһын төҙөүгә оҙайлы азатлыҡ көрәше һөҙөмтәһендә өлгәшә. Был башҡорттар һәм урыҫ булмаған башҡа халыҡтар өсөн мөһим тарихи ваҡиға була. Бөтөн үҙәк һәм урындағы баҫмалар Килешеү хаҡындағы актты баҫтырып сығара. Митингтарҙа һәм йыйылыштарҙа, ауыл сходтарында һәм кәңәшмәләрҙә был актты яҡлаған резолюциялар һәм ҡарарҙар ҡабул ителә. Совет Башҡортостанының иғлан ителеүе, автономиянан ситтә йәшәгән, бигерәк тә Өфө губернаһында тороп ҡалған башҡорттар араһында ҙур теләктәшлек таба. Билдәле инглиз педагогы һәм йәмәғәт эшмәкәре Вильям Гуд менән әңгәмәһендә Ленин "Большевиктарҙың һәм совет власының принциптарының береһе - бәләкәй халыҡтарҙың үҙаллылығын таныу ул", тип белдерә. Миҫал итеп, Башҡорт республикаһын таныуҙарын килтерә.

**Әхтәр БОҪҠОНОВ, сәйәсәт фәндәре кандидаты:** 1917 йылда төҙөлгән Башҡорт шураһы Октябрь революцияһынан һуң большевиктар менән элекке властың бәрелешкә инәсәген, "Башҡортостан хаҡһыҙ рәүештә дошманлашҡан яҡтарҙың хәрби хәрәкәттәре театрына әйләнеүе ихтимал" икәнен аңлай. Ошо сәбәпле, "Башҡорттар бер береһенә ҡаршы һуғышырға тейешме?" тигән һорау биреп, Шура ағзалары үҙҙәре үк: "Юҡ, улай булырға тейеш түгел. Сөнки беҙ большевиктар ҙа, меньшевиктар ҙа түгел. Беҙ башҡорттар. Беҙ кемдәр яғында булырға тейешбеҙ? Бер кем яғында ла түгел. Беҙ үҙ яғыбыҙҙа. Был бәхәсле мәсьәләргә беҙҙең бер ҡыҫылышыбыҙ юҡ", - тип яуап бирәләр. "Һәр милләт үҙен һаҡларға тейеш, иң яҡшы сара - башҡорт халҡының власты үҙ ҡулына алыуы, халыҡтың үҙ яҙмышын үҙе хәстәрләүе, йәнде, ҡанды үҙ көстәре менән һаҡлауы", - тигән һығымта яһала Фарманда.

Идея-сәйәси яҡтан башҡорттар үҙбилдәләнеш хоҡуғы өсөн көрәшә. Был хоҡуҡ бөгөнгө көндә донъя йәмәғәтселеге тарафынан рәсми рәүештә танылған халыҡ-ара норма булып тора. Үҙбилдәләнеш хоҡуғы, башҡорт милли хәрәкәте үткәргән съездарҙан күренеүенсә , Башҡортостандың Рәсәйҙән айырылыуын аңлатмай. Киреһенсә, башҡорттар өсөн үҙбилдәләнеш Рәсәй составында, автономия формаһында ғына мөмкин булыуы билдәләнә. Шуны ла билдәләргә кәрәк: һуңынан башҡа милли автономиялар Башҡортостан өлгөһөндә төҙөлә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт милли хәрәкәте үҙбилдәләнеш өсөн көрәштә Ҡаҙағстан һәм Урта Азия халыҡтары өсөн юл күрһәтеүсе йондоҙ була. Әлбиттә, бөгөнгө көндә был ваҡиғаның, был датаның әһәмиәте республика кимәлендә лә, Рәсәй кимәлендә лә баһаланып етмәй. Асылында, федерализм (СССР ысынбарлыҡта унитар дәүләт булыуға ҡарамаҫтан) 90-сы йылдарҙа дәүләт тарҡалғанда ҙур ҡан ҡойоштар башланмауына (1917 йылдағы унитар империалистик Рәсәйҙән айырмалы рәүештә), ә РСФСР-ға ҡараған милли территориаль берәмектәрҙе низағһыҙ (Чечнянан башҡа) һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итә. Шуға күрә лә Башҡорт хөкүмәте менән Совет власы араһындағы Килешеүгә 100 йыл тулғанда сараларҙың масштаблыраҡ булырына ышанғы килә.**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Киндер таҡыяны кейеү ысулы буйынса шиктәр ҙә юҡ түгел. Барын-табындар был турала аныҡ мәғлүмәттәр бирә алманы. Әммә иҙеү уйымы киң булыуынан сығып, был биҙәүес менән бергә уйымды ҡаплап тороусы тағы бер биҙәүес кейелергә тейеш булғандыр тип уйлайым. Ул, моғайын да, алғы яҡтан тарыраҡ, арттан киңерәк итеп тегелгәндер. Арҡалағы уйым башкейемдән һәленеп төшкән туҡыма менән ҡапланған. Башкейемде миңә ҡарғатуй байрамының алып барыусыһында күрергә насип булды. Ул бейек булмаған цилиндр формаһындағы ҡатырғаны ҡыҙыл туҡыма менән ҡаплап эшләнгән. Алдан, ҡабырғаларынан, өҫтә һәм аҫта тимер түңәрәктәр тегелгән, ә уртала - ҙур бер һумлыҡ ҙурлығындағы түңәрәк ҡуйылған (һүрәт). Был баш кейеменең ҡабырғаһынан сулпыға оҡшатып ике тимер сулпы эленгән. Алып барыусының арҡаһында һәм күкрәгендә ике ҡыҙыл ситса яулыҡ тоташтырып ҡулбашҡа бәйләнгән. Тыш яҡтан улар шундай уҡ тимер түңәрәктәр менән биҙәлгән, ә арҡаһында инде хатта оҙонсараҡ итеп сулпы йәки суҡ тегелгән. Алғы яғынан аҫҡы өлөшөндә ваҡ ҡына дүртмөйөшлө тимерҙәр тегелгән, уларҙың аҫтына суҡтар ҡуйылған.





Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарҙа арҡала һәм ҡулбаштарҙа йөрөтөлгән һәм яға менән бер бөтөндө тәшкил иткән тағы бер биҙәүес бар. Ул иңһәлек тип атала. Уның формаһы яғаныҡына оҡшаш. Был биҙәүес сәс өҫтөнән кейелеп, арҡала йөрөтөлә, яға менән тоташып, бер бөтөндө тәшкил итә (һүрәт).





Башҡортостандың төньяҡ яртыһында күкрәксә йәки күлдәк өҫтөнән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары әмәйҙек, дәүәт, хәситә кейгән. Әмәйҙек һул ҡулбаш аша, уң яҡ ҡултыҡ аҫтынан кейелә һәм күкрәкте тулыһынса ҡаплап тора. Ул 15-20 сантиметр киңлегендәге төрлө мәрйендәр һәм көмөш тәңкәләр менән ҡапланған, аҫ яғы осона тәңкәләр тағылған мәрйен суҡ менән биҙәлгән туҡыма киҫәгенән тора. Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында ул дәүәт тип атала. Дәүәт мәрйендәр менән түгел, туҡыма тәңкәләр, аҡыҡ, ҡаштар менән биҙәлә, ҡайһы берҙә уның ситтәре уҡалана. Ҡулланылышта дәүәт йөрөгән райондарҙа башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары шундай уҡ икенсе биҙәүесте - хәситә кейә. Әммә уның әһәмиәте биҙәүес кенә булмай - уға мотлаҡ рәүештә төрлө бетеүҙәр тегелә. Әгәр хәситә айырым кейелһә, ул формаһы һәм туҡымаһы буйынса әмәйҙектән бер нисек тә айырылмай тиерлек. Әгәр инде дәүәт аҫтына тегелһә, ул күпселек осраҡта оҙонса, дүрт мөйөшлө, бетеү һәм биҙәүестәр тегелгән туҡыма киҫәге булған.

Билдәле йәшкә тиклем ҡыҙҙар баштарына ябынмай йөрөгән. Улар сәстәрен берҙән генә үргән. Тормошта булған ҡатын-ҡыҙ иһә сәсбау ҡушып, сәсен ике толомда йөрөткән. Сәсбау осона ҙур тәңкәләр тағылған. Уларҙы төньяҡ-көнсығышта сәс тәңкәһе тип атайҙар.

**✔ Нескә тойғо, кисерештәр менән тулы мелодрама ял иттерәләр, тик ул оҙон ғүмерле түгел, бындай әҫәр тап үҙ мәлендә уҡыусыға, тамашасыға ялған комфорт, уңайлыҡ хисе лә бирәләр, әммә тормошто һәр саҡ аҡыл алға әйҙәй.**



**Фәрзәнә Аҡбулатова:** Йәмғиәттә мелодрама түгел, ә фекер алға этәрә. Нескә тойғо, кисерештәр менән тулы мелодрама ял иттерәләр, тик ул оҙон ғүмерле түгел, бындай әҫәр тап үҙ мәлендә (уҡығанда, ҡарағанда) уҡыусыға, тамашасыға ялған комфорт, уңайлыҡ хисе лә бирәләр, әммә тормошто һәр саҡ аҡыл алға әйҙәй. Шуға фәлсәфәүи, уйландырырлыҡ әҫәрҙәр йәмғиәтте хәрәкәткә килтергәнсе бер ни тиклем ваҡыт кәрәк буласаҡ.

**Күптәр Яҙыусылар союзына инергә ашҡына. Мин аңлап торам: даими рәүештә бер яҙыусыға Салауат Юлаев премияһы бирелә, тора-бара орден-миҙал, бәлки, фатир, торлаҡ биреләләр, халыҡ яҙыусыһы, халыҡ шағиры булып китеү мөмкинлеге лә барҙыр... Улайға китһә, кешене матди файҙа ғына ҡыҙыҡһындырырға тейешме? Яҙыусылыҡ статусы нимә бирә һуң ул? Яҙыусылар союзы айырым бер кастамы әллә?**

**Фәрзәнә Аҡбулатова:** Мин быны, ниндәйҙер кимәлдә, йәмғиәттә бер статус тип тә аңлайым. Сөнки яҙыусының йәмғиәттә үҙенә генә хас бурысы бар, ул шуны үтәргә тырыша. Был юл мауыҡтырғыс һәм уның үҙ ауырлыҡтары ла етерлек. Яҙыусылар союзы - ул бер ғаилә. Ғаиләлә йәмғиәттең күпселек проблемалары сағылыш ала, быны ла онотмайыҡ. Каста - саҡ ҡына икенсерәк бит. Кастаның талаптары ҡатырҙы күрмәй ҡалғанмын", - тип, шундай ҙур үкенес кисереүем әле булһа хәтерҙә. Бына был традиция - яҙыусыларға ололоҡло мөнәсәбәт - әле лә хөкөм һөрә. Яҙыусылар бөгөн үҙҙәре лә шуны талап итә. Ләкин хәҙер заман бөтөнләй икенсе. Әҙип ҡатырғаһын алам, тип тырышҡан ҡайһы бер иптәштәр яҙыусының статусы ниндәй кимәлдә икәнен, башҡа күп кенә нескәлектәрҙе аңлап та етмәйҙер, бәлки. Улар элеккесә: "Бына мин Союзда ағза булып алам да, яҙыусы булып китәм, яҙыусыға булған бөтә хөрмәт минеке буласаҡ", - тип уйлай. Дөйөмләштереп әйткәндә, хәҙер халыҡ һинең кесәңдә ҡатырғаң бармы, юҡмы, ул турала уйламай, ә эшеңә ҡарай. Әйтер һүҙең бармы, нисек сығыш яһайһың, һорауҙарға яуап бирә алаһыңмы? Әҫәрҙәрең ниндәй?

**Яҙыусылар союзы социализм осоронда барлыҡҡа килде. Яҙыусылар башлыса халыҡ мәнфәғәтендә эҙҙы, власть та улар алдына шундай талап ҡуйҙы. Социализм осоронда яҙыусыларға дәүләт ярҙамы күрһәтелде, ял йорттарында ял итеү ойошторолдо. Хәҙер баҙар иктисады шарттарында йүнәлештәр ҡырҡа үҙгәрҙе. Дәүләткә халыҡ мәнфәғәтен яҡтыртыусы яҙыусылар кәрәкмәй булып сыҡты...**

**Фәнил Күзбәков:** Бөгөнгө власҡа, ғөмүмән, яҙыусылар кәрәкме икән ул? Финанс ярҙамы ла булмаған, Яҙыатай тәрбиәһе күрмәй үҫкән кешеләй күҙаллайым.

**Оҙаҡламай Яҙыусылар союзының яңы етәксеһен һайларға йыйынаһығыҙ. Уны яҙыусылар үҙҙәре һайлаясаҡмы, әллә власть тәғәйенләйәсәкме?**

**Фәнил Күзбәков:** Власть, әлбиттә, Союз эшен ниндәйҙер бер контролдә тоторға, үҙенең кәнәшен бирергә, телмәгән етәкергә тейеш. Ләкин ижади ойошма үҙенең мәсьәләһен үҙе хәл итә алмай икән, ул ниндәй ойошма инде ул?..

**Баҙар шарттарында барлыҡҡа килгән "эффектив менеджер" тигән вазифа бар. Финанс мәсьәләләрен һәйбәт белгән кеше өсөн был вазифа. Уны хәҙер күп ижади ойошмаларға, вуздарға ла индерәләр. Бәлки, Яҙыусылар союзына ла шундай эффектив менеджер кәрәктер?**

**Фәнил Күзбәков:** Мин быныһы менән тулыһынса килешәм. Яҙ



ғына мәсьәләне хәл итә, тип ҡарау ҙа дөрөҫ булмаҫ ине, сөнки бер-ике шиғыры менән генә әҙәбиәт тарихында ҡалған шағирҙар ҙа бар. Был юҫыҡта, миңә ҡалһа, Михайло Ломоносовтың шундай фәһеме иғтибарға лайыҡ: "Хоҙай Тәғәлә ихтыярын циркуль менән үлсәргә теләгән математикты айыҡ фекерләй тип әйтеүе ҡыйын. Астрономияға йәки химияға псалтырь буйынса өйрәнергә мөмкин тип иҫәпләгән дин уҡытыусыһы ла шундай уҡ хәлдә", - ти. Был һығымтаны ижадҡа бәйләп тә ҡарап була бит. Йәғни, дини мәсьәләләргә үлсәмдәр ҡулланып булмаған һымаҡ, ижад эшен дә тәғәйен генә үлсәп, ниндәйҙер бер критерий менән генә баһалап булмай. Шағирҙы тәғәйен аңлау, баһалау өсөн уҡыусыға ла, күпмелер дәрәжәлә, шағир булырға кәрәк. Тимәк, әле һин әйткән тиражды шартлы күрһәткестәрҙең береһе итеп ҡабул итергә мөмкиндер. Ләкин... Заманында Рәшит Назаровтың йөҡа ғына ике йыйынтығы донъя күрҙе. Тәүге китабында уҡ уның кем икәне билдәле ине һәм уға шул китабы өсөн генә лә Салауат Юлаев премияһын биреп була ине... Ә халыҡ шағиры, халыҡ яҙыусыһы тигән исемдәргә кире әйләнеп ҡайтҡанда, ижад эшенә сәйәсәттең килеп ҡыҫылыуы һис кенә лә яҡшыға килтермәүен күрәбеҙ. Бер генә миҫал килтерәү менән сикләнәм: әйтәйек, Зәйнәб апай Биишеваның, йә булмаһа Ноғман ағай Мусиналған әҫәрҙәре юғарылығы талабын ҡуйған. Ысынлап та, ул юғарылыҡтағы әҫәрҙәр бик һирәк бөгөн. Хикмәт шунда: берҙән, һүҙҙең ҡәҙере киткән, бәҫе төшкән мәл. Әлеге лә баяғы, һүҙҙең күптәргә кәрәге юҡ. Унан һуң, яҙыусыларҙың үҙҙәренең араһында ла битарафлыҡ көслә. Ә битарафлыҡты мин ябай ғына аңлатмаҡ инем, сөнки нимә тип әйтһәң дә, әҙип һүҙенә иғтибар итеүсе юҡ. Яҙыусылар менән әҙәбиәт, мәҙәниәт проблемалары тураһындағы ошондайыраҡ һөйләшеүҙәрҙән һуң беҙҙе, моғайын, власть та ишетер, беҙҙе саҡырып алып, һөйләшеүҙәр ойошторор, тип өмөтләнәбеҙ (Совет заманында бындай бәйләнеш булды бит барыбер). Ләкин өмөттәр аҡланмай. Тимәк, яҙыусы ниндәйҙер һүҙ әйтә лә, уны ишетмәгәстәр, был ғәмәлдән төңөлә, битарафлыҡҡа бирелә.

**Власть ишетһен өсөн нимәне үҙгәртергә кәрәк?**

**Фәнил Күзбәков:** Бәлки башта үҙебеҙҙе үҙгәртергә, властҡа, кемдәрҙер килтереп биреренә, кемдәрҙер беҙҙең мәсьәләләрҙе хәл итеренә генә ышанып ултырыуҙан арыныр ға кәрәктер. Бөгөн беҙ бары тик үҙебеҙгә, үҙ көсөбөҙгә генә ышана алабыҙ - заманы шундай. Ә яҙыусының бурысы - заман йүгәнен үҙ ҡулына алыр лидерҙар, геройҙар, уйлана белгән кешеләр тәрбиәләй алырлыҡ, илһамлы, тәрбиәүи һүҙ әйтеү.

# МЕНӘН КҮК АРАҺЫНДА:

## фәрештәлек тә бар...

һәр социаль төркөмдөң үҙ йәшәү ҡағиҙәһе, юғары каста - мәңге юғары, түбәне - мәңге түбән. Был үҙгәрмәҫ ҡанун. Был баҫҡыс һинә ғүмерлеккә бирелгән. Исем-дәрәжәләр алыуға, ихтимал, Союздың йоғонтоһо барҙыр. Был мәсьәләгә төрлө яҡтан ҡарарға була.

**Фәнил Күзбәков:** Ниндәйҙер касталыҡ, бәлки, идаралыҡта үҙен һиҙҙереп ҡалалыр ул, сөнки барлыҡ яҙыусылар съезда ғына бергә осраша. Съезд иһә 4-5 йылға бер мәртәбә үткәрелә, ә йыйылыш йыл һайын булһа ла, унда һәр кем ҡатнаша алмай. Йәғни, көндәлек проблемаларҙы идаралыҡҡа инген 4-5 генә кеше хәл итә. Кемделер Союзға алыу-алмау мәсьәләһе лә ошо кешеләр ҡарамағында. Шунан сығып ҡына тотош һығымта яһарға ярамайҙыр, тип уйлайым. Был - бер. Икенсенән, бына һеҙ "һәр кем яҙыусы булырға ынтыла" тинегеҙ. Миңә ҡалһа, был традицияға бәйле. Сөнки, яҙыусыларҙың баһаһы Совет осоронда бик ҙур булды. Бына мин мәктәптә 5-6-сы кластарҙа уҡығанда, ни сәбәптәндер, яҙыусылар менән осрашыуға бара алмай ҡалдым. 5-6 саҡрым алыҫлыҡтағы сит ауылда уҡыйбыҙ. Иртәгәһенә класс етәксебеҙҙән Баһырмандың клубында ике шағир - Абдулхаҡ Игебаев, Сафуан Әлибай менән осрашыу үтеүе тураһында ишеттем. Минең: "Эх, тере яҙыусыларусылар союзы ҡәҙимге бер ижади ойошма булып ҡына ҡалмаҫмы, тигән борсолоу ҙа бар. Юғарылағылар әҙәбиәткә мохтажлыҡ кисермәйҙер һымаҡ. Уларға хатта яҙыусының яҡлауы ла кәрәк түгел, буғай. Ҡайһы берәүҙәр, власть ярҙам итһә, беҙ уларҙы маҡтар инек, тип хыяллана. Ябайлаштырып әйткәндә, улар үҙҙәренең ҡулъяҙмаһын һонол: "Бына мин һине маҡтаймын, тик һин ярҙам ит", - тиергә лә әҙер. Ләкин парадокс шунда: власҡа хатта ул кешеләрҙең дә кәрәге юҡ. Беҙ әле булһа, совет осорон-да шулай ине, былай ине, тип һөйләнергә яратабыҙ. Аңларға күптән ваҡыт: әҙәбиәттең ул осоро бик-бик теләһәк тә бер ҡасан да ҡабатланмаясаҡ, ул тарихта ҡалды. Ләкин идеаль осраҡтан сығып ҡарағанда, аҡыллы власть халыҡҡа, яҙыусыларға таянырға, үҙенә һәйбәт мәғәнәләге аҡыллы оппозиция булдырырға бурыслы. Бутафорик түгел. Бутафорик оппозициялар беҙҙә етерлек ул. Аҡыллы власть нисегерәк эшләй? Ғаилә менән сағыштырып ҡарайыҡ. Һәйбәт ғаиләлә аҡыллы атай бармаҡ ҡына янап ҡуя. Ул һинә һуғыу түгел, урынһыҙға әрләмәй ҙә, ә ҡараш менән генә лә күпте аңлата. Ә иң мөһиме - үҙенең эше, өлгөһө менән һабаҡ бирә, хатаң булһа, төҙәтеп, белеп еткермәһәң, өйрәтеп ебәрә. Бөгөнгө йәмғиәтте мин йыш ҡына яҙыусылар союзына ниндәйҙер бойондороҡһоҙлоҡ булдырыу өсөн был бик кәрәкле вазифа, тип иҫәпләйем. Идаралыҡ үҙ аппаратын аҫырай алһын өсөн унда ысын мәғәнәһендә менеджер эшләһә, бик һәйбәт булыр ине. Союз эргәһендә Әҙәби фонд бар, ул аҙалыҡ өсөн түләнгән взностарҙы йыя, яҙыусыларға күпмелер ярҙам итә, әммә уның мөмкинлектәре сикләнгән. Әҙип бөтөнләй ҡараусыһыҙ, ярҙамһыҙ ҡалырға тейеш түгел.

**Башҡорт йәмғәтселеге араһында, халыҡ шағиры исеменә кем лайыҡлы, тигән һорау буйынса фекер алышыуҙарҙы ишеткәнем бар. Ә һеҙ халыҡ яҙыусыһы, халыҡ шағиры исемдәре кемдәргә бирелергә тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

**Фәнил Күзбәков:** Был мәсьәләләрҙе, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, иң юғарыла ғына хәл итәләр. Икенсе яҡтан, премиялар, исемдәр биреүҙе Яҙыусылар идаралығы ғына хәл итеп ултырыуы ла яҡшыға алып килмәй. Иң һәйбәте - халыҡ фекерене ҡолаҡ һалыу, матбуғатта фекер алышыу, шуға нигеҙләнеп, идаралыҡта кәңәшләшеү һәм тәҡдим индереү.

**Шундай критерий индереп буламы: әгәр һинең китабыңдың дөйөм тиражы 500 меңдән үтһә һәм ул һатылып бөтһә, һин халыҡ яҙыусыһы, халыҡ шағиры исеменә дәғүә итә алаһың...**

**Фәнил Күзбәков:** Ниндәйҙер критерийҙар булырға мөмкин. Ләкин тап ана шул критерийҙар дың халыҡ яҙыусыһы исемен алыуы бик тәбиғи. Был бер кемдә лә бәхәс уятмай, уларҙы халыҡ үҙе яратып ҡабул иткән. Ә инде ниндәйҙер осраҡта һөмһөҙлөктөң, йылғырлыҡтың, яраҡлаша белеүҙең еңеп сығыуы бик үкенесле. Бындай күренештәрҙең әҙәбиәткә ни тиклем зыян килтереүен күҙаллауы ла ҡыйын!

**Фәрзәнә Аҡбулатова:** Эйе, был рухлылыҡ менән бәйле. Һүҙ сәнғәте күңел менән эш итә. Уны яралай ҙа, дауалай ҙа. Ул ут та, һыу ҙа. Айырым талаптар булһа ла, һүҙ сәнғәтен ҡалыптар, үлсәмдәр эсендә тотоу ауыр. Урта ҡуллы яҙыусы, әйтәйек, әрһеҙ, сауҙагәрлек һәләтле булып, китабын үҙе һатып йөрөй, ярҙамсылар ҙа таба икән, шул рәүешле күп тиражлы китабын да таратып бөтөрә ала. Ләкин был уның талант кимәлен билдәләмәйәсәк.

**Салауаттың, Зәки Вәлидиҙең һүҙҙәре, өндәмәләре онотолмай. Хәҙерге заман да һынылыш осоро, ләкин беҙ яҙыусыларҙан ундай һүҙҙәр ишетмәйбеҙ ниңәлер...**

**Фәнил Күзбәков:** Бөтөнләй ишетелмәй, тип әйтмәҫ инем, төрлө сәйәси ваҡиғаларға бәйле шиғырҙар ҙа баҫылып тора. Шул уҡ "Киске Өфө"нөң 1-се битендә "Шағир һүҙе" тигән рубрика күренгеләп ҡала. Ул рубриканың һирәк килеп сығыуын да аңлайым: гәзит мөхәррирәте унда баҫыласаҡ әҫәргә Рәми Ғариповтың, Шәйехзада Бабичтың туған телгә, туған ергә, милләткә ар-

**Фәрзәнә Аҡбулатова:** Уныһы шулай, ләкин яҙыусы үҙе яҙған китаптың баҫылып сыҡҡанын биш, унан да күп йылдар көтә икән, уның һүҙенең һуңлауы, иҫкереүе лә бар бит әле. Тормош бит хәҙер йәшен тиҙлеге кеүек үҙгәрә. Ижадсы ла ваҡыт үтеү менән камиллаша бара, шуға элекке ижадсы менән бөгөнгө ижадсыны сағыштырмаҫ инем. Хатта ҡайһы берәүҙәр бик нисә йыл элек яҙған әҫәрҙәрен үҙҙәре лә уҡымай.

**Фәнил Күзбәков:** Шулай, ләкин ижадсымын тигән ижадсы барыбер ҙә күпкә иҫәп тоторға тейеш, быйылға, бер йылға, биш йылға ғына түгел. Унең әҫәре килер быуындар ҙа уҡый алырлыҡ булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шағирлыҡ менән мөтәшағирлыҡ, китаптар сығарыу-сығармау, китап уҡыу-уҡымау, премиялар биреү-бирмәү мәсьәләләре көнүҙәк, улар тураһында ваҡытлы матбуғат биттәрендә фекер алышыуҙар ҙа кәрәк. Ләкин улар, уҡыусыларҙан бигерәк, әҙиптәр өсөн ҡыҙыҡлы. Уҡыусы өсөн иң тәү сиратта әҫәрҙең сифаты, күңел талаптарына, халҡыбыҙ мәнфәғәтенә яуап биреүе мөһим. Бөгөнгө һөйләшеүҙә яңыраған төплө, уйландырырлыҡ, ишаралап та әйтелгән фекерҙәр яҙыусы - халыҡ - хаким бәйләнешен нығытырға ярҙам итер, тип ышанабыҙ.**

**Илдар ҒӘБИТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**
**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

✓ *Бер төркөм ҡарттар килеп, ямғыр яуҙырыуын үтенһә, Мифтахетдин мулла үҙенең йортонда һаҡланған ҡыу ат башын ҡулына алып, Арыҫланйылға башындағы ҡайынлыҡҡа барып, һыуға бағышлап намаҙ һәм саҙаҡа ҡылған.*



*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*



# ӘҮЛИӘЛЕК - БӨЙӨК КӨС УЛ,

## йәғни Мифтахетдин мулла тураһында бер хәтирә

### Тәбиғәтте буйһондороу көсө

Бик көслө әүлиәләрҙең генә тәбиғәттең бер мәлен үҙ ихтыярына бойһондора алыуы боронғо замандарҙан уҡ билдәле. Алда һөйләп үтеүемсә, Мифтахетдин бесән бурҙарына ысын мәғәнәһендә аҡман-тоҡманды күрһәтә. Буран бөтөн ауылда булғанмы, әллә уларҙың аттары тирәһендә генәме, әйтеүе ҡыйын. Әммә Мифтахетдин олатай үҙе иҫән сағында ауылы Кинйәбулатты ҡоролоҡтан сарсатмаған. Оло быуын кешеләренең хәтерләүенсә, шулай булған: бер төркөм ҡарттар килеп, ямғыр яуҙырыуын үтенһә, Мифтахетдин мулла үҙенең йортонда һаҡланған ҡыу ат башын ҡулына алып, Арыҫланйылға башындағы ҡайынлыҡҡа барып, һыуға бағышлап намаҙ һәм саҙаҡа ҡылған (ул ҡайынлыҡ бөгөнгө көндә лә Мостаҡ мулла ҡайынлығы тип атала). "Ҡыу ат башы" тигәне - ул оло йылҡы малының ныҡ кибеүҙән, һелкеткән ваҡытта шалтырлап торған баш һөйәге. Ул үҙенсә бик яҡшы барометр һәм гигрометр. Һауалағы дымлылыҡ артып, ямғыр яуырҙай сиккә етһә, баш һөйәге шешенә, һелкеткәндә шалтырлауы кәмей төшә. Мифтахетдин мулла теләктәрен Хоҙай Тәғәләгә еткереп, мотлаҡ булған бөтөн йолаларҙы башҡарғандан һуң ҡайтып китә, ауылға килеп инеүе була, ямғыр ҙа яуа башлаған, тиҙәр. Ундай әүлиәләрҙең ҡәберенә килеп, ямғыр яуҙырыуҙы һәм башҡа теләктәрҙе үтенгән саҡта ла унының мәңге тере рухи көсөнөң үтенестәрҙе тормошҡа ашыра алыуы боронғо замандарҙан уҡ кешелеккә билдәле (әммә һәр кем дә әүлиә ҡәберлегенә килеп, теләктәрен тормошҡа ашыра алмай. Ундай уйҙарығыҙҙы үрсетмәгеҙ).

Ошо юҫыҡтан, бер ҡыҙыҡлы ваҡиғаны ла һөйләп үтеү кәрәктер. 2010 йылдағы ямғырһыҙ ҡоролоҡ. Мифтахетдин олатайҙың бүләсәренең тыумышы менән Ғафури районынан булған кейәүе, унын ҡәберенә килеп, тейешле булған йолаларҙы башҡарып, ауылға ямғыр яуҙырыуын һорай. Шул ыңғайы ҡабат Кинйәбулат ауылына һуғылып тормай, еңел машинаһында ғаиләһе менән Өфөгә юлланалар. Ҡайтып еткәс, Кинйәбулатҡа шылтырата. "Ауыл өҫтөндә ҡап-ҡара болоттар ҡуйырҙы, ләкин яумайынса, тауҙар яғына китте", тип яуап бирәләр уға. Күп тә үтмәй, был кейәүгә Ғафури районындағы ауылдаштары шылтырата: "Ишембай яҡтарынан ҡуйы болоттар килеп сығып, ямғыры ике сәғәттәй ауыл тирәһен тетте лә һалды..." Бына шулай, берәй теләк теләгәндә, теләгендең "адресын" да белгертергә кәрәк икән.

### Балаларын ҡурсыуы

Алда әйтеп үтеүемсә, Мифтахетдин мулла һуңыраҡ өйләнә. Эйе, ауылында уны атайҙан ҡалған мал-тыуары, әҙер донъя көтөп тормай. Кәртә-ҡура төҙөп, мал-тыуарлы булып, кәләш алырлыҡ мөлкәт-байлыҡ туплағанса ла байтаҡ ваҡыт үткәндер. Ул 30-35 йәштәр тирәһендә генә башлы-күҙле була. Тәүге улы Мөхәмәтхәбиб - 1894 йылда, икенсеһе Фәйзрахман 1902 йылда донъяға килә (Мөхәмәтхәбиб - ғәрәпсә данлы, ятраҡан дуҫ, юлдаш тигән мәғәнәлә, Фәйзрахман - белемле, бай һәм рәхимле тигәнде аңлата). Заманына һәм ваҡытына күрә, улдары унын өмөт-теләктәрен аҡлаған, тип әйтергә була. Бөтөн Рәсәй өсөн ҡәһәрле 1937 һәм ҡорбанлы 1941 йылдарҙың килерен алдан белеп торған әүлиәгә улдарының тормошо артыҡ мәрхәмәтһеҙ булмаһын, ғүмерҙәре оҙағыраҡ һәм һау-сәләмәт булһын өсөн дә аҙмы рухи көсөн, һаулығын сарыф итергә тура килгәндер. Ул бер Хоҙайға ғына билдәле. Икеһен дә үҙе уҡыған Һайран мәҙрәсәһендә уҡытып, заманына күрә төплө белемле итә. Тәүге ҡатыны ваҡытһыҙ донъя ҡуйып, икенсе ҡатынға өйләнгәс, 1915 йылдар тирәһендә үк тулыһынса динилеккә бирелеп, бер ат, бер һыйыр ғына тигәндәй ҡалдырып, уртаса хәлләләр рәтенә күсә. Был инде унын киләсәктә балаларын эҙәрлекләүҙәргә дусар итмәҫ өсөн, алдан күреп-һиҙеп эшләгән эше булғандыр. Бәлки шунын өсөн дә улы Фәйзрахманды икенсегә, үҙе һайлаған "Йылан Ғәрифулла" ҡушаматында йөрөгән Ғәрифулла Хәйруллиндың Ғәрифә исемле ҡыҙына өйләндергәндер. (Ғәрифулла Хәйруллин менән Ғәләүетдин Ишмырҙин бер ата балалары. Фельдшер Ғәләүетдиндың улдары, Зәки Вәлидиҙең хәрби сардарҙары - Ишмырҙиндар. Кинйәбулат ауылының беренсе ауыл Советы рәйесе Хәйруллин Ғәрифулланың улы Абдулла Хәйруллин -Блюхер армияһында партизан отрядының командиры. Аҡтар, ҡыҙылдар заманында Ҡотломөхәмәтовтар, Хәйруллиндар һәм Ишмырҙиндар ошондай туғанлыҡтары арҡаһында ике яҡтың да эҙәрлекләүҙәренән ҡотолоп иҫән ҡалған).

Оло улы Мөхәмәтхәбиб оло йәштә булыуы һәм белеме арҡаһында 1941-1945 йылғы һуғышта хеҙмәт армияһында хеҙмәт итеп, иҫән-һау әйләнеп ҡайта. Ә инде кесе улы Фәйзрахманға һынауҙарҙың мулы һәм ҡатмарлыраҡтары тейә. 1937 йылда Фәйзрахман олатайҙың өҫтөнән мулла балаһы, Совет власын һанға һуҡмай, кладовщик булыуынан файҙаланып, келәттән иген урлай, тип ғәйепләп, ялыу яҙалар. Бик ҡаты тентеүҙәрҙә һәм һорау алыуҙарҙа ул үҙен аҡлай ала. Һорауҙар алған НКВД уполномоченныйы: "Һинә дошманлашҡандар барыбер ҡаҙалырҙар, тынғы бирмәҫтәр", - тип, олатайға ғаиләһе менән яңы төҙөлә башлаған Ишембайға күсенеп, шоферҙар курсына уҡырға урынлашырға ярҙам итә. Автомашиналарҙы яҡшы белгәне өсөн "бронь" менән ҡалдырылып, авторемонт батальонында һуғыш аҙағынаса хеҙмәт итә. Үҙенең улы Фәтхрахман 1943 йылда фронтта һәләк булғас, өс тапҡыр военкомға барып, һуғышҡа ебәреүҙәрен һорап ғариза яҙһа ла, ебәрмәйҙәр.

### Кирәмәттәре

Мифтахетдин әүлиәнең әле фәҡәт изге әүлиәләрҙә генә була торған телекинез (йыраҡтағы әйберҙәрҙе күтәреү, шылдыра алыу) көсө лә билдәле. Бәлки, телекинез түгел, ә телепортация (күҙ асып-күҙ йомғанса бер урындан икенсе урынға күсә алыу һәләте) булыуы ла ихтимал. Тимәк, ул әле левитация (ауырлығын юғалтып һауала осоп йөрөй алыу һәләте) алымдарын да үҙләштергән булып сыға. Әүлиә Зәйнулла Рәсүлевтың ошондай һәләте тураһында яҙылған хәтирә лә һаҡланған. Стәрле күперенә етергә байтаҡ ара ҡалғас, ул юлдаштарына: "Һеҙ күпер аша сығып, бараһы ерегеҙгә барығыҙ, ә минең тиҙ арала башҡарыр, кисектергеһеҙ эшем бар", - тип, яҙғы Ағиҙел өҫтөнән, ҡоро ерҙәгеләй атлап, икенсе ярға сыға ла, үҙ юлын дауам итә...

Әле студент саҡтарымда Фәйзрахман олатайыма килгәндә, ул үҙе менән булған бер ваҡиғаны һөйләгәйне. Ул атаһының ҡушыуы буйынса һатыу-алыу эштәре менән Стәрлегә барғанында, алдашып-мутлашып тигәндәй, ярты төргәктәй туҡыма үҙләштерә. Бөтә алған әйберҙәрен арбаға тейәп ҡайтып килгәндә, Байыҡ күперенә еткәс, һәр ваҡыт йыуаш, күндәм аты, аптырашҡа ҡалдырып, сығынлап ала ла китә. Баш бирмәй юлдан ситкә төшөп китеп, арбаны ауҙарып, бер тәртәһен һындырып ҡуя. Атын туғарып, арбаны йүнәткәндән һуң, тирә-яҡта туҙышып ятҡан әйберҙәрҙе йыйып, ҡабат арбаға тейәй башлай. Бөтә әйберҙәре лә теүәл, ә теге ярты төргәк тауар ғәйеп булған. Арба эргәһенә бер әҙәм, ҡош-ҡорт, эт тә яҡын килмәй. Ә тауар юҡ! Яҡын-тирәне ҡабат-ҡабат тентеп сыға, таба алмай. Ҡараңғы төшөр алдынан ғына үҙҙәренең йорттарының ҡапҡа төбөнә килеп туҡтай. Башҡа ваҡытта атаһы үҙе сығып ҡапҡа асып, юл хәлдәрен һорашып ҡаршы алған була. Был юлы ҡомғанын тотоп, тәһәрәткә сығып барһа ла, улы яғына боролоп та ҡарамай. Иртәнсәк асыуы һүрелә төшкән атаһы улы эргәһенә килеп: "Күпме әйтәм, күпме өйрәтәм! Хәрәм мал, алдашып табылған килем беҙгә ярамай, тип. Юҡ, һаман нәфсеңде үҫтерәһең!" - ти.

Сығып китеп, байтаҡ ҡына йөрөп ингәс: "Тауарың бик матур икән. Күҙҙә ҡыҙырлыҡ шул. Шау сәскәле. Атыңды ек тә, кисә аунаған ереңә барып, күпер аҫтынан төргәгеңде алып ҡайт!" - тип, сығарып ебәрә. Юғалған ярты төргәк тауар күпер урҙаһына ҡыҫтырылған көйө торған була. Килене Ғәрифә үҫмер-ҡыҙ ваҡытында Хәҙисә еңгәһе ҡарауында үҫкәнгә, теген машинаһында тегергә өйрәнгән була (Хәҙисә Ишмырҙин Ғәләүетдин фельдшерҙың ҡатыны. Минзәлә яҡтарынан булып, аш-һыу әҙерләүгә, тегенеү-сигенеү эштәренә оҫта була. Ятраҡан бикәсе Ғәрифәгә лә үҙе белгәндәрҙе өйрәтә. Мифтахетдин мулла үҙе үк килененә "Зингер" теген машинаһы бүләк итә). Был ваҡиғанан һуң ауылдың байтаҡ ҡыҙ-ҡырҡындары Ғәрифә еңгәләренән шау сәскәле күлдәктәр тектереп кейә.

1931 йылда 74 йәшендә баҡыйлыҡҡа күскәндән һуң да Мифтахетдин мулланың улдары Мөхәмәтхәбиб һәм Фәйзрахманды, нәфселәре үҫеңкерәп киткәндә, киҫәткән йә үҙенсә хөкөмгә тарттырған осраҡтарҙы ишетергә тура килде.

### Әүлиәләр менән ихтилалдар бәйләнеше

Фән һәм ғилемдең төрлө тармаҡтары, йүнәлештәре менән танышып, шул өлкәләрҙә үҙен үҫтереү өҫтөндә даими эшләгән кешегә ниндәйҙер һорауҙарға яуап биреү, фекерләү, йомғаҡлау һәләте лә хас. Әсәйем һөйләүенсә, Мифтахетдин олатайҙың өй ҡыйығы аҫтында һаҡланған китаптары араһында үҙенең дә ҡалын дәфтәрҙәргә ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған эштәре һаҡланған. Атаһының шул эштәре менән ғәрәп телендә яҙыу-уҡыуҙы һыу кеүек эскән улы Фәйзрахман да таныш булған. Тик үҙе иҫән саҡта, атаһы яҙғандарынан белгәндәрҙе халыҡҡа сығарыуҙың елгә ҡаршы төкөрөү икәнен аңлап, шымып йөрөгәндер. Бына 1990 йылдарҙан һуң Фәйзрахман олатай ысын тарихты һөйләп бирә алыр ине, ләкин үҙе лә 1986 йылда баҡыйлыҡҡа күсә. Бер ваҡыт юғары белемле балалары (минең әсәйемдән башҡалары, йәғни улдары Мәғҙән, Нафиҡ, Риф Мифтаховтар, ҡыҙы Гөлфирә Ҡотломөхәмәтова. Әсәйем Ғәмбәрә 16 йәше лә тулмаҫтан, атайым Дусалин Исламетдингә кейәүгә сығып, донъя ҡороп йәшәй башлай-

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# БЕР ҮК БАЛЫҠ БАШЫ, ТИМӘГЕҘ

**"Киске Өфө"нөң 7-се һанында Абдрафиҡ Сәфәрғәлиндың "Чапай мыйығына ышанырға халыҡ ҡара һарыҡ түгел" тигән мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны. Ошонан һуң Башҡортостан юлдаш телеканалы ла үҙенең сираттағы "Телеүҙәк" тапшырыуын ошо темаға - билдәле рус комедияларын башҡорт теленә тәржемә итеү урынлымы, урынһыҙмы тигән һөйләшеүгә арнаны.**

Ысынлап та, был киноларҙы ҡараусыларҙың күбеһе һәр һүҙе афоризмға әйләнеп бөткән "С легким паром", "Операция "Ы", "Кавказская пленница", "Джентельмены удачи", "Любовь и голуби" кеүек рус комедияларын башҡорт теленә ауҙарыу бик үк уңышлы килеп сыҡмаған, тигән фекерҙә. Мин үҙем дә был билдәле фильмдарҙы башҡортса ҡарауға күнә алмайым. Сөнки тәржемә фильмында Никулин, Вицин, Моргуновтарҙың тауышы ғына түгел, һөйләгән һүҙҙәренең мәғәнәһе лә тоноҡлана. Ул ғына ла түгел, "Любовь и голуби" фильмының башҡортса вариантын ҡарап, Людмила Гурченконың билдәле фразаһының башҡортса ни тиклем тупаҫ һәм ҡаты яңғырауын ишетеп, был киноны бүтән ҡарамаҫтай хәлгә төштөм. Бәлки, фильмды тәржемә итеүгә сығымдар әҙерәк китәлер, ләкин рус фильмдарын тәржемә иткәнсе, милли телеиндустрияны үҫтереү маҡсатында үҙебеҙҙең ерлектә, башҡортса кино төшөргәндә, отошлораҡ булыр ине, тип уйлайым.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҙар. Беҙҙе - ете баланы үҫтереп, аяҡҡа баҫтырҙылар. Ауыр тупраҡтары еңел булһын. Үлеренән ике-өс йыл алда Мифтахетдин олатай килене Ғәрифәгә: "Мин үлеп, бер йыл үткәс, бик ырыҫлы ҡыҙың донъяға килер", - тип, әсәйем тураһында әүлиәлек ҡылған) бергә йыйылған ваҡытта Салауат ихтилалы тураһында әңгәмә башланып китә. Ниңәләр үҙ балаларының һөйләгәне менән килешмәгән Фәйзрахман олатайым шундай һүҙҙәр ысҡындыра: "Һеҙҙең Салауат тураһында һөйләгәндәрегеҙ атайымдың яҙғандарына яҡын да килмәй!" Аҙаҡтан унан Мифтахетдин олатайҙың яҙғандары тураһында һораһалар ҙа бер нәмә лә һөйләмәҫ була.

Рәсәй дәүләтенең һәр хакимлыры тарихты үҙҙәренсә үҙгәртеп, үҙҙәренсә халыҡҡа һеңдерергә тырышҡан. Шуның өсөн дә КПСС Пугачев-Салауат ихтилалын батшалыҡҡа ҡаршы булғаны өсөн "Бер үк уйлы, ынтылышлы халыҡтар күтәрелеше" өлгөһөндә күрһәтә. Бөгөнгө көнгәсә беҙ бары китаптарҙа яҙылғандарҙы уҡыныҡ һәм китаптағыса фекерләнек, уйланыҡ. Үҙегеҙгә уйланыу һәм фекерләү өсөн бер тарихи мәғлүмәт кенә килтерәм: Ҡолғона ауылынан ете саҡрымда Ҡалыу-Айыры тигән ауыл урынлашҡан. Шул ауылдан булған мәрхүм дуҫым Абайдуллин Фәхретдин ағай һөйләп ҡалдырыуынса, уларҙың ата-бабалары Ғафури районындағы Ташбүкән ауылынан күсенеп килеп, йәшәүгә уңайһыҙыраҡ булған Үргәғамыш тигән урында нигеҙләнәләр. Бөгөнгө Ҡалыу-Айыры ауылының нисәнсе йылдарҙа Үргәғамыштан әлеге ултырған ерҙәренә күсенеүе аныҡ ҡына билдәле түгел. Фәхретдин ағай хәтерләүенсә, уларҙың йорт соланында ағас таҡтаға ҡабырсаҡтың эске яғы кеүек ялтырап торған буяуҙар менән төшөрөлгән, бала күтәреп торған ҡатын һүрәте элеүле торған (нис шикһеҙ, урыҫтарҙың тәреһелер). Ғөмүмән, был тирәлә алтын, көмөш, тимер тәреләр, еҙҙән ҡойолған ҡынғырауҙар, хатта алтындан ҡойолған түш тәреһе табылыуы тураһында мәғлүмәттәр Ҡалыу-Айыры халҡының хәтерендә әле лә һаҡлана...

Күптәрегеҙҙә, бында ихтилалдар һәм башҡа төрлө яуҙар менән әүлиәләрҙең ниндәй бәйләнеше бар, тигән һорау тыуыр. Бик боронғо замандарҙан уҡ билдәле: хан-солтандар яу сабыр алдынан үҙҙәренең әүлиә-күрәҙәселәренә мотлаҡ мөрәжәғәт итер, яугирҙары алдында уларҙың рухи көсөн, еңеүгә ышаныслы һәм ынтылышын ныҒытыу ниәтендә сығыш яһауҙарын һорар булған. Дини руханиҙар һәм рухи юлбашсылар үҙҙәре лә яуҙарҙа ҡатнашҡан. Башҡорт илендә ике быуат буйына күтәрелеп торған ихтилалдарҙың башында ла яу башлыҡтары булып күпселек осраҡта көслө дини руханиҙар һәм әүлиәләр торған (был мәсьәләгә ҡағылғанда, ихтилалдарҙы баҫтырырға сыҡҡан рус ғәскәрҙәрендә лә дини руханиҙар - поптар, монахтар һәм башҡаларының ҡатнашыуын онотторға ярамай).

Аңлы, көнәшле рәүештә ойошторолған ихтилалдарҙың яу башлыҡтарының яҙмыштары ла күпмелер килмәлдә әүлиәләрҙең, йәғни рухи юлбашсыларҙың күҙәтеүендә һәм тәрбиәүендә алып барылған. Билдәле булыуынса, Салауаттың атаһы Юлай Аҙналиндың көслө руханиҙар, әүлиәләр менән осрашыу осраҡтары халыҡ хәтерендә һаҡланған. Тимәк, улар шул ваҡыттарҙан уҡ Салауатта киләһе күтәрелештең яу башлығын күреп, уны рухи тәрбиәгә алғандыр һәм яҙмышын да халыҡтар хәтерендә ҡалдырып, Башҡорт иленең быуаттар буйы үҙ ирке өсөн алып барған күтәрелештәренең мәңгелек "символик батыр"ына әйләндереүгә өлгәшкәндер. Әйтәйек, Салауат батыр ҙа, Юлай Аҙналин да Кинйә Арыҫланов кеүек, ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ далаларында эҙ юғалта алған (Кинйә үҙе үк абыҙ-әүлиә). Әммә әүлиәләр өсөн Салауаттың юғалыуы түгел, ә мәңгелек азатлыҡ батыры булып ҡалыуы мөһимерәк булған. Дини руханиҙарҙың, рухи юлбашсыларҙың - әүлиәләрҙең башҡорт халҡының күтәрелештәрендә ҙур көс булыуын аңлаған Рәсәй батшалары уларҙы кәметеү маҡсатынан мөмкин булғандарҙың бөтәһен дә эшләгән. Шуға ла һуңғы йылдарҙа "Батырша ихтилалы" тураһында халыҡҡа таратылған имеш-мимештәр ҙә икеләнеү тыуҙыра...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һеҙ Кинйәбулат ауылында йәшәп, баҡыйлыҡҡа күскән Мифтахетдин әүлиә тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәтле булдығыҙ. Үлеренән бер йыл алда ул өйҙәгеләргә үҙе тураһында әүлиәлек ҡылып: "Мин был донъянан киткән көндә, йылы ямғыр яуып үткәс, күктә йәйғор ҡалҡыр. Уның бер осо беҙҙең зыяратҡа төшөр. Мине шул урынға ерләрһегеҙ", - тигән. Бөтәһе лә ул әйткәнсә була. Мифтахетдин олатайҙың өй ҡыйығы аҫтында һаҡланған китап, ҡулъяҙмалар бөтөнләй үк яндырылмаған. Әсәйемдең хәтерләүенсә, ул ҡалыныраҡ, һүрәтлерәк китаптарҙы алып төшөп, мейескә яҡҡан. Ә ҡулъяҙмалар һәм һүрәтһеҙ китаптар ҡалған була. Һуғыштан һуң улы Фәйзрахман был китап, ҡулъяҙмаларҙы ваҡыты булғанда алып уҡыштырған. Күпмелер мәғлүмәттәрҙе үҙенең дәфтәренә лә күсереп алған була.**

**Көслө күрәҙәсе һәм табип булараҡ даны бөтөн башҡорт иленә таралған Мифтахетдин әүлиә тураһында мәғлүмәтле булған күпмелер оло быуын вәкилдәре лә әле иҫәндәр, иҫән булмағанда ла, уларҙың һөйләп ҡалдырғандарын хәтерләгән йәш быуын бар. Ҙур үтенесем һәм һорауым: ишеткән-белгәндәрегеҙҙе миңә ҡыҫҡаса ғына хат менән (Ишембай районы, Маҡар ауылы, Больничный урамы, 15а. Р. И. Дусалинға) йә телефонға шылтыратып һөйләй алаһығыҙ. Йорт телефоны: (347-94) 75-5-85, кеҫә телефоны: 8-937-320-60-53. Хәбәрҙәштәр булайыҡ. Әүлиәләр тураһында хәтирәләр, риүәйәттәр туплау һәм уларҙың мәңгелек рухын халыҡ хәтерендә ҡабаттан тергеҙеү иң изге һәм сауаплы ғәмәлдәрҙең береһе!**

**Рәдис ДУСАЛИН,**
**Ишембай районы Маҡар ауылы участка дауаханаһы табибы, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, һәүәҫкәр тарихсы, шағир.**
**(Аҙағы).**

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*

# ИР-ЕГЕТТЕҢ КҮҢЕЛЕНДӘ...

## эйәрләнгән ат ятыр

**Мәҙәниәт йылы айҡанлы иғлан ителгән "Бер һүрәткә ҡарап..." тигән бәйгебеҙ гәзит уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Бөгөнгө матди етешлек өҫтөн ҡуйылған заманда ла уҡыусыларыбыҙҙың рухи ҡиммәттәргә, милли асылыбыҙға тоғро ҡала алғанлығын, ижади фекерләү ҡеүәһенә эйә булғанлығын күреү һәм уларҙың тап "Киске Өфө"нөң тоғро дуҫтары булыуы беҙҙең өсөн дә шатлыҡлы.**

Конкурстың тәүге ҡатнашыусыһы - танылған рәссам, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Йәлил Сөләймәновтың "Һуңғы уҡ" тигән һүрәтенә килгән хаттарҙы барлап сыҡҡандан һуң, рәссамдың үҙе ҡатнашылғандағы жюри еңеүсе итеп **Салауат ҡалаһынан Сәүиә Бикмөхәмәтованы** ("Гәзиз халҡым, һинең яҙмыш, үҙе ялҡын, үҙе һалҡын..." № 3) таныны. Беренсе еңеүсебеҙҙе ҡотлайбыҙ һәм Йәлил Сөләймәновтың бүләген - "Сәскәләр" тигән картинаһын редакциянан килеп алыуығыҙҙы һорайбыҙ.

Бәйгене Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, БР Рәссамдар союзы рәйесе Хәтип Фазыловтың "Төш" тигән һүрәте дауам итә. Ҡыҙығаныска күрә, һүрәтте тәҫлө итеп биреү мөмкинлегебеҙ юҡ, уның башлыса зәбәржәт йәшел һәм алтынһыу төҫтәрҙән торғанлығын ғына әйтә алабыҙ. Билдәле булыуынса, йәшел төҫ - ул тыныслыҡ, өмөт, гармония төҫө. Һүрәттә, тыуҙырыусы булараҡ, атай кешенең улының батыр булыуын теләүе лә; сабый баланың толпар атта һыбай йөрөү хыялы ла асыҡ сағыла кеүек. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, гәзит уҡыусылар? Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: һүрәт буйынса фекерҙәрегеҙҙе ирекле рәүештә (мәҡәлә, һүрәтләмә, бер ҡәлимә фекер, риүәйәт, нәҫер, хикәйә һ.б) яҙып ебәрә алаһығыҙ. Конкурс эштәрен баһалағанда һүрәттең идея-тематик йөкмәткеһен, художестволы үҙенсәлеген, заман һулышын һынландырыуын ни рәүештә аса алыуығыҙға төп иғтибар йүнәлтеләсәк. Һеҙҙән хаттар көтәбеҙ!



*ЗАУЫҠ*

*Риф МИФТАХОВ*

# ХИКМӘТЛЕ ҺҮҘ КҮП БУЛМАЙ

Мәғлүмәтле булған һуҡыр
Аҡыл, белем, һүҙ менән:
Донъяны һәм кешеләрҙе
Күберәк күрә күҙленән.

* * *

Байлыҡҡа ғүмер буйы
Табынһа йәне, уйы:
Әҙәмде тартып батыра
Ҡомһоҙлоҡ тигән ҡойо.

* * *

Яуызлыҡҡа, вәхшилеккә ҡаршы,
Көсөң булып, ҡаршы тормаһаң,
Вайымһыҙлыҡ тигән енәйәтең
Хөкөм итер һине бер заман.

* * *

Асыуыңды-нәфрәтеңде
Ҡалһаң йыйып үҙ йәнеңдә:
Ҡотҡарырһың - үҙеңде лә,
Асыу тотҡан әҙәмде лә.

* * *

Юғарыла булыр, һутҡа тулыр, имеш
Шулай уйлағанда аҫҡа осто емеш,
Ерҙә серей хәҙер йәп-йәш кенә килеш...
Был да һабаҡ - беҙ уйларға тейеш.

* * *

Аҡыл өйрәтмәй аҡыллы кеше,
Өлгө күрһәтеү - уның һәр эше.

* * *

Нимә еңел?.. Башҡаларға кәңәш биреү.
Нимә ауыр? Үҙ-үҙеңде еңә белеү.

* * *

Бәхет килмәҫ ишетеүҙән бәхет һүҙен,
Эҙләмәһәң бәхетеңде башта үҙең.

* * *

Ямғыр яумаҫ болот, емеш бирмәҫ ағас...
Вәғәҙәһеҙ әҙәмдәр бит шуларға хас.

* * *

Һаңғырау булһаң әҙәмдәрҙең хаҡ һүҙенә,
Еңелгәндә һин үпкәлә тик үҙеңә.

* * *

Дәүләттең арбаһы һаҙлыҡҡа батҡан,
Айырмаған аҡыллыны ахмаҡтарҙан.

* * *

Хоҡуҡһыҙ ил - зәғиф, таркау, үсле...
Закон көслө илдә - халыҡ көслө!

* * *

Ике йөҙлө тора-бара йәнен һата,
Унға-һулға гәйбәт сәсеп, үҙе бата.

* * *

Һәр етемгә, һәр сирлегә
Кәрәк ҡулдың һуҙғаны:
Бераү бераүҙе ҡотҡарһа -
Ҡотҡара бар донъяны.

* * *

Яуыз йән дә тыштан була матур ҡайсаҡ:
Гөл өҫтөндә ятҡан арбар йылан һымаҡ.

* * *

Йәштәрҙә һиҙелһен ҡарттарҙың аҡылы,
Ҡарттарҙа һаҡланһын йәш кеше асылы.

* * *

Бәндәләрҙә ялған күркәмлек -
Тәкәбберлек тигән түбәнлек.

* * *

Тәүәккәллек - йөрәк ҡомары,
Аҡылдан да ҡай саҡ юғары.

* * *

Дәрт иткәндә була уйлатып,
Тик ғәмһеҙҙе булмай уятып.

* * *

Бул ҡайны саҡ һүҙһеҙ - тыштан ныҡ:
Өндәшмәүҙән ҡаты хөкөм юҡ.

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАН БАҪЫМЫ СИРЕ... ЯҢЫЛЫШ ҠУЙЫЛМАҒАНМЫ?

■ Британияның Бристоль университеты ғалимдары әйтеүенсә, баланың аҡыл ҡеүәһе үҫеше уның бәләкәй сағында нисек туҡланыуына бәйле. Өс йәшкә тиклем "зарарлы" аҙыҡ-түлек ашаған балаларҙы биш йылдан һуң тикшереп ҡарағандар һәм интеллект коэффициентының тиҫтерҙәренекенә ҡарағанда түбәнерәк булыуы асыҡланған. Ғалимдар әйтеүенсә, өс йәшкә тиклем балаға дөрөҫ аҙыҡ биреү мөһим, сөнки мейе йәшәүҙең тәүге өс йылында әүҙем үҫешә.

■ Ҡытай ғалимдары раҫлауынса, йәшел сәй радиациянан һаҡлай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә ике сынаяҡ йәшел сәй эсеү бик файҙалы. Йәшел сәй, шулай уҡ әфлисун компьютер экрандарынан таралған зарарлы нурҙарҙан да һаҡлай, ти ғалимдар. Йәшел сәйҙең япраҡтарында башҡа файҙалы элементтар менән бер рәттән, радиация тәьҫиренә ҡаршы торған матдәләр бар. Ә әфлисун яман шешө булдырмай, иммунитетты ла күтәрә.

■ Британия ғалимдары белдереүенсә, 25 процент осраҡта табиптар кешеләргә "артериаль гипертензия" тигән диагнозды яңылыш ҡуя. Быны аңлатыуы бик ябай: кешелә дауаханаға килеү, аҡ халатлы табип менән әңгәмәләшеү көсөргәнеш тыуҙыра, шуға ла уның артериаль ҡан баҫымы күтәрелә. Һөҙөмтәлә, уға дөрөҫ диагноз ҡуйылмай, икенсенән, ул "һауыҡҡансы" гипертониянан дарыуҙар эсергә мәжбүр була. Эксперименттар күрһәтеүенсә, бындай пациенттарҙың дүрттән бер өлөшө һау-сәләмәт. Шуға ла был күнелһеҙ хәлгә тарымаҫ өсөн, өйөгөҙҙә мотлаҡ рәүештә ҡан баҫымын үлсәй торған прибор - тонометр булырға тейеш. Артериаль ҡан баҫымын даими контролдә тотоу ғына дөрөҫ булмаған диагноздан ҡотҡара ала.

■ Бала ҡулдарының әүҙемлеге ни тиклем юғарыраҡ булған һайын, уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үҫешә, бала яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тотторорға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, биттәрен һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға яҡшы массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәҡдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптарын да бәләкәсегеҙ яратып уйнаясаҡ. Былар барыһы ла баланы киләсәктә китап уҡырға яратырға ла күнектерәсәк, ти белгестәр.

■ Йель университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды профилактикалау өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәһә, медитация бындай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

СӘЙЛӘҮ ГӘБЕ



**"Киске Өфө"лә "Сәйләү гәбе" тигән бик матур рубрика бар ине. Ике әхирәттең сәй эскәндә, икеү-ара аралашҡанда донъяуи аҡыл, донъяуи кәңәш-төңәштәр тураһындағы әңгәмәһенә ҡоролғайны был рубрика. Шуны яңыртайыҡ әле. Әхирәттәр араһында һөйләшер һүҙҙәр күп, бына оҙаҡламай баҡса эштәре башлана, һәр кем ошо тәңгәлдә лә үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлаша ала. Күптән түгел бер әхирәтем менән гөл үҫтереү серҙәре тураһында гәп һатҡайныҡ, шул һөйләшеүҙе гәзит уҡыусыларға ла еткерәйем әле, тинем.**

# ГӨЛ ҮҪТЕРЕҮ ҘӘ...

## үҙе бер һәләт

**➔ Гөләмдөң ботағын өҙөп, кешегә биргәйнем, үҙемдеке ҡороно ла ҡуйҙысы. "Гөләндөң ҡото киткән инде", тине хеҙмәттәштәрем. Мин был хаҡта элек өләс әйемдән дә ишеткәйнем ишетеүгә. Был дөрөҫ һүҙме икән?**

- Шундай ышаныу бар барлыҡҡа. Минең үҙем менән ундай хәл булғаны юҡ. Кемдер гөләмдө оҡшатып, уны үрсетергә теләк белдерә икән, уның үтенесен шатланып үтәйем - гөлдән "рөхсәт" алып, иплән кенә ботағын йә япрағын өҙөп бирәм. Ғөмүмән, үсемлекте, сәскәне өҙгән саҡта иплән кенә бышылдап, уларҙан "рөхсәт" һорарға кәрәк. Өләсәйем шулай өйрәтте беҙҙе. Ә һинең гөләндөң һулыуына килгәндә, уның сәбәптәре төрлө булырға мөмкин. Бәлки, тамырын имгәткәнһеңдер, бәлки, тупрағын алыштырыр ваҡыт еткәндер...

**➔ Гөл үҫтергәндә тупраҡты алыштырып торорға ҡушалар шул. Бынының һин нисегерәк эшләйһең? Магазинда һатылған тупраҡты файҙаланаһыңмы?**

- Магазиндағы тупраҡҡа әллә ни ышанып бөтмәйем. Шуға тупраҡты үҙем әҙерләргә тырышам. Ҡыштың һалҡын көндәре үтеп барған мәлдә ҡарағай ағастары үҫкән урмандан алам уны (тупраҡ таҙа ла, ҡорттарһыҙ ҙа була). Ҡарын көрәп, ерҙе асҡас, үсемлек тамырҙары күп булған өҫкө ҡатламды бер-ике сантиметрҙай ҡалынлыҡта ҡырып ташлап, тағы өс-дүрт сантиметр ҡалынлыҡтағы тупраҡты ҡаҙып алам, шунан ҡырып ташланған ҡатламды кире урынына һалып тигеҙләйем дә, өҫтөнә ҡарын ырғытам. Февраль баштарында был тупраҡты йылы бүлмәгә индерәм. Кәрәккән һайын самалап ағас көлө, йылға ҡомо, әҙерәк ағас күмере ҡушып тотонам. Бындай тупраҡҡа ултыртылған гөл ашлама өҫтәп тормаһаң да йәй буйы матур булып үҫә.

**➔ Гөлдәрҙе ашлама менән туҡландырыу кәрәкме һуң ул? Бүлмә гөлдәре былай ҙа әрһеҙ була бит...**

- Әрһеҙ үҫкән гөлдәр бар, әммә бик күп гөлдәргә, бигерәк тә декоративтарына, яҙын-йәйен аҙнаһына - бер, ә көҙөн-ҡышын айына бер тапҡыр ашламалы һыу һибергә кәрәк. Шулай ҙа сама тигән нәмә бик мөһим. Ашламаларҙың барыһында ла шул бер төрлө матдәләр инде ул: азот, калий, фосфор һәм башҡаһы. Шуға, тупраҡты һатып алырға тура килгәндә, уның ҡабындағы яҙыуҙы иғтибар менән уҡып сығырға кәңәш итәм. Тупраҡҡа ашлама ҡушылған булһа (аҡ төйөрҙән торған ашлама күҙгә күренеп тә тора ул), өҫтәп ашлама керетеп тороу кәрәкмәй. Ашлама артыҡ булһа, үсемлектең тамырын яндырып, һәләк итә. Тупраҡты баҡсанан алып ҡайтһам, гөлдәргә зыян итеүсе ҡорттарҙан ҡотолоу өсөн уны духовкала 40 градус эҫелектә тотоп алам. Ошонан да эҫерәк кәрәкмәй, юҡһа, тупраҡтың структураһы боҙолоп, яраҡһыҙға әйләнә, гөл үсмәй.

**➔ Ә бына гөлдө ботаҡтан йә япраҡтан үрсетеүселәргә ниндәйерәк кәңәштәр бирерһең?**

- Һыуға тығып ҡуйылған гөл ботағы тамыр ебәргәс, уны бик бәләкәй генә һауытҡа ултыртам. Ҙурайып үҫеп киткәс тә уны беренсеһенән бик уҡ ҙур булмаған һауытҡа күсерәм. Ғөмүмән, гөлдәрҙе үҫеп ултырған һауытынан ҡапыл ҙур һауытҡа күсереп ултыртырға ярамай, тупрағы әсей ҙә гөл үҫеүенән туҡтап ҡала, хатта һәләк була.

Гөлдө сәскә атып ултырған сағында күсереп ултыртырға ярамай. Үрсетер өсөн дә гөлдөң ботағын, япрағын (мәҫәлән, миләүшә - фиалканы) сәскәгә тумалған йә сәскә атып ултырған сағында алмайһың. Ундай гөл йонсоу була, йә үҫеп китә алмай, һулып та ҡуя. Сәскә атыуынан туҡтап, кәмендә ике аҙна ял иткән гөлдән алынған үрсетмә көслө була. Шулай ҙа бер саҡ туғандарымдағы бер миләүшә сәскәһенә күҙем төштө, миндә ундай төҫтәгеһе юҡ ине, япрағын һорап алып ҡайтҡас, уны гөл итеп үҫтереп ебәрҙем. Тик сәскәгә тумалмаҡ борон тағы бер нисә япрағын ҡырҡып алып, һыуға тығып ҡуйҙым да был көсһөҙ гөлдө ташланым.

**➔ Гөлгә ниндәй һыу һипһәң дә яраймы?**

- Бөтә гөл яратыусылар кеүек, мин дә гөлгә һибә торған һыуҙы һауытҡа кистән тултырып ултыртам да, иртән һибәм. Йыш һәм мул итеп һипкәнде күп гөлдәр яратмай - тамырҙары серей. Мәҫәлән, аҡса гөлө (крассула, денежное дерево), миләүшә һыуҙы бик яратмай. Миләүшә гөләнөң тамыры аҫта була, шуға ла уның һауыты ултырған тәрилкәһенә әҙ генә һыу һалыу ҙа етә. Таныштарым "Миләүшә гөләнә балғалаҡлап ҡына көрпәк ситенән ике көнгә бер һыу һибеп торабыҙ", тиҙәр. Ләйсән тигән ҡыҙ, табаҡ төбөнә һыу һалам да, миләүшә гөлдәремде 10-15 минутҡа шунда ултыртып алам, ти. Циклоен гөләнә лә һыуҙы аҫтындағы һауытына ғына һалып торорға кәрәк, һыуҙы өҫтән ҡойһаң, ул тиҙ арала серей. Алоэ, яран гөлө (герань), каланхоэ һыуһыҙ ҙа бирешмәй. Кәрлә анар (карликовый гранат) гөлө һабаҡтары селек кеүек ҡоро булыуына ҡарамаҫтан, тупрағының гел дымлы булыуын ярата. Орхидеяны гел дымда тоторға, ҡоро көндәрҙә япрағын сылатып торорға кәрәк, ләкин япраҡ төбөндә һыу йыйылып торорға тейеш түгел.

**➔ Хәҙер гөл төрҙәре тураһында бер нисә кәңәш. Беҙҙең халыҡ башлыса яран гөләнө үҫтерергә ярата. Ләкин тора-бара ул йәмһеҙләнә...**

- Эйе, яран гөлөн йыл да яңыртып тормаһаң, япрағын яйлап ҡойоп, яланғасланып ҡала. Мин шулай итәм: яран гөләм көҙөн сәскә атыуынан туҡтағас, һабағын төбөнән үк ҡырҡып ташлайым да, көршәген ванна аҫтына ултыртып, яҙға тиклем онотоп торам. Ҡыш буйы ванна булмәһендәге дымды тартып, тамыры бирешмәй һаҡлана, тупраҡ өҫтө йәшелләнгәс кенә тәҙрә төбөнә сығарып ултыртам. Яңырып, ҡуйы булып үҫеп китә. Кәрлә анар гөләнөң дә, япраҡтарын ҡойоп, ямаҡланып, ял итеп ала торған ғәҙәте бар, был, ғәҙәттә, ноябрь, декабрь, ғинуар айҙарына тура килә. Ошо ваҡытта ҡайһы бер хужабикәләр, был гөл ҡороно, тип уйлап, уны сығарып ташлай. Улай итмәгеҙ, ә һалҡыныраҡ һәм ҡараңғыраҡ урынға ултыртып, һыу һибеүҙе кәметегеҙ. Февраль башында яҡтыға ҡуйып, етерлек һыу һибә башлаһаң, шунда уҡ шәп итеп үҫеп китә, хатта бик оҙонайып киткән ботаҡтарын ҡайсы менән ҡырҡып, ҡыҫҡартып тороу кәрәк. Ошо гөл янар алһыу төҫтә сәскә ата һәм аҙаҡ емештәре лә була, уларын ашарға ла мөмкин хатта. Ботаҡтарын бик ҡуйы итеп үҫтерергә тырышмағыҙ, сәскәһе күп булһа, көсө етмәй, иртә ҡойолоп бөтә, 3-7 сәскә булһа - еткән.

Күп гөлдәр, шул иҫәптән кәрлә анар гөлө, клеродендрум тик яҡты урындарҙа ғына матур үҫә, шулай ҙа тура төшкән ҡояш уларҙы һулыта. Алоэ, кодиеум, каланхоэ, алҡа гөлө, аҡса, яран гөлдәре ҡояшҡа бирешмәй. Ә бына әсекәй гөлө тик ҡояшта ғына матур итеп үҫә. Үтәнән үтә иҫкән ел, һауа температураһының ҡырҡа үҙгәреүе гөлдәргә хәүефле.

Хлорофитум булмәне микробтарҙан таҙартыусы гөл. "Ҡәйнә теле" гөлө токсиндарҙан таҙарта, уны газда аш бешергән урында үҫтереү яҡшы. Әсекәй гөләнөң япрағын алып, сайҡатып ашап ебәрһәң дә була, уны салатҡа ла ҡушалар. Алоэ япрағын буйға ярып, йомшаҡ яғы менән төнгөләккә сиҡан-шешкә япһаң, файҙаһын тойорһоң. Тымау менән яфаланыусылар 7 көн дауамында иртәле-кисле танауҙарына 4-5 тамсы каланхоэ һуты тамыҙһа, был ауырыу уларҙы бөтөн яфаламаҫ. Аҡса гөлө аҡсаны күбәйтә, тип әйтер инем, үҙем быға ышанмайым, үҙенсәлекле булғаны өсөн яратып үҫтерәм уны.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гөл үҫтерергә яратыусылар беҙҙең һөйләшеүҙән, моғайын да, берәй файҙа алғандыр. Һеҙҙе тағы ниндәй темалар ҡыҙыҡтыра? Сәйләү гәбендә тикшерәйек ул тема, һорауҙарҙы. Әйткәндәй, сәйләү гәбенә ир-егеттәрҙе лә саҡыра алабыҙ. Хаттар, шылтыратыуҙар көтәбеҙ.**

Алһыу ҒӘЗИЗОВА
сәйгә саҡырҙы.

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

# ӨЛӘСӘЙҘӘР ҺАНДЫҒЫНДА...

## ҡомартҡылар һәм тарихи хәтер

**Баймаҡ районының "Ағинәйҙәр ҡоро" халҡыбыҙҙың тағы бер күркәм йолаһын тергеҙеүгә юл һалды. Улар ойоштorған "Өләсәйем һандығы" тип аталған үҙенсәлекле сараның маҡсаты - өләсәйҙәр һәм ейәнсәрҙәрҙең аралашыуы, өлкән быуындың йәш быуынға халҡыбыҙ йолалары, аҫыл ҡомартҡыларыбыҙ тураһындағы хәтерҙе, оҫталыҡ серҙәрен тапшырыу.**

Сара тәүҙә үҙәк китапханала ҡаланың 1-се, 2-се, 3-сө, 4-се лицей уҡыусы ҡыҙҙары ҡатнашлығында үтте. Өләсәйҙәр алып килгән ҙур күргәҙмәгә боронғо балаҫтар, яҫтыҡтар, һөлгөләр, күҙ яуын алып торған ҡорама юрған-түшәктәр, күлдәктәр, сигелгән әйберҙәр ҡуйылһа, түрҙән семәрле һандыҡ урын алды. Һандыҡты асыр өсөн тылсымлы һүҙ әйтергә кәрәк ине. Ҡыҙҙар-ейәнсәрҙәр ул һүҙҙең "Хазина" икәнлеген әйткәс, һандыҡ асылды. Иң өҫтә изге ҡомартҡылар - ике Ҡөрьән китабы ята ине. Береһе - бик боронғо, ҡәҙерләп тышлап һаҡланған. Уларҙың хужалары хажиәләр Гөлсара Йәнтүрина менән Сәлимә Батталова ҡыҙҙар-ейәнсәрҙәргә ҡәҙерле китаптың төшөнсәһен аңлатып, тәрбиәүи вәғәздәр һөйләне. Артабан серле һандыҡтан башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо күлдәктәре, ҡашмау, иҙеү-түшелдеректәр, биҙәүестәр, ҡульяулыҡ, янсыҡтар, хатта батша ваҡытында биҙәкләп, семәрләп мисәт ҡуйып һуғылған бер затлы беләҙек сығарылды. Сәкинә Иҫәнғолова ғорурлыҡ менән әсәһенән ҡалған күлдәк-камзулды кейеп, 17 йәштә сиккән таҫтамалын, 1941 йылда ырғаҡ менән сигелгән селтәрҙе күрһәтте. Өләсәйҙәр аҡса, асҡыс һалғыс түшелдерек, янсыҡ тураһында һөйләне. Фәниә Кәримова элек-электән биҙәүестәр, көмөш беләҙек, йөҙөк, иҙеүҙәр ҡатын-ҡыҙҙың ҙур байлығы һаналған икәнен һөйләп, өләсәһенең ҡәҙерле әйберҙәре менән таныштырҙы. Зөһрә Юнысова әсәһенең ҡомартҡыһы - төрлө төҫтәге йөндән һуғылған, әле булһа ла төҫөн юғалтмаған, 50 йылға яҡын һаҡланған аҫалы балаҫын күрһәтте, ғүмер баҡый өләсәй-ҡартәсәйҙәр эскән үлән сәйҙәре, дарыу үләндәре тураһында ентекләп һөйләне. Яңылбикә Баймырҙина үҙе бәйләгән ҡул эштәре менән таныштырҙы һәм күптәрҙә был шөғөлгә ҡыҙыҡһыныу уятты. Миңзифа Шәрәфетдинова әсәһенән ҡалған үҙенсәлекле көмөш беләҙек, алҡалар һәм йәш ҡыҙҙарҙың һөйөү билгеһе итеп егеттәргә сигеп биргән ҡульяулыҡтар өлгөһө менән таныштырҙы. Әлбиттә, район ҡорама бәйгеләрендә гран-при яулаған Сулпан Нәбиуллинаның ҡул эштәре байрамдың йөҙөк ҡашы булды. Уның үҙе теккән башҡорт милли кейемдәре, иҙеү, ҡашмауҙары һәр кемдең иғтибарын йәлеп итте.

"Өләсәйем һандығы" артабан ҡаланың һөнәрселек лицейына юл алды. Ҡыҙҙар-ейәнсәрҙәрҙең халҡыбыҙҙың тарихына, боронғо ҡомартҡыларға битараф булмауы ҡыуандырҙы. Улар һөйләүенсә, һәр кемдең тиерлек өйөндә өләсәйҙәрҙең ниндәйҙер ҡомартҡыһы, шулай уҡ изге Ҡөрьән китабы бар икән. Лицей уҡытыусылары ошондай тәрбиәүи сараларҙың ҙур әһәмиәткә эйә булыуын белдереп, ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдарҙың егеттәр менән дә килеп осрашыуын теләп, рәхмәт әйтеп ҡалды.

Артабан ағинәйҙәр Һаҡмар ауылына саҡырыу алды. Аҡман-тоҡман бураны башланыуға ҡарамаҫтан, ағинәйҙәр автобусҡа ултырып, Ҡаҡтуғайға елдерҙе. Шулай итеп, "Өләсәйем һандығы" Һаҡмар мәктәбендә үҙенең эшен дауам итте. Бай йөкмәткеле программа, күҙҙең яуын алған күргәҙмә, һандыҡтағы хазиналар менән танышып алғас та ҡыҙҙарҙың ағинәйҙәрҙән тиҙ генә айырылғыһы килмәне. Улар "Өләсәйем һандығы"ндағы иҙеү, ҡашмауҙарҙы кейеп, фотоға төшөп, үҙҙәре лә ошондай иҙеүҙәрҙе эшләргә теләк белдереүе һөҡландырҙы. Шулай итеп, Һаҡмар ауылы халҡының ағинәйҙәрҙе ихлас ҡаршы алып, оҙатып ҡалыуына сикһеҙ ҡыуандыҡ. Ауыл мәсетенең имам-хатибы, уҡытыусылар, ағинәйҙәр, китапхана хеҙмәткәрҙәренең бергә уңышлы эшләүе күҙгә салынды. Оло ғорурлыҡ кисереп, рухи аҙыҡ алып әйләнеп ҡайттыҡ Һаҡмарҙан.

Кемдер бөгөн боронғолоҡтоң, иҫке ҡомартҡыларҙың нимәгә кәрәге бар, тип уйлауы ла ихтимал. Шул саҡ Удмуртияның һәр саҡ милли кейемдәрҙә сығыш яһаған Буран ауылы өләсәйҙәре иҫкә төшә. Улар Рәсәйҙе генә түгел, Европаны яуланы. Күптән түгел Рәсәйҙең билдәле модельеры Вячеслав Зайцевтың Сибай ҡалаһы ағинәйҙәре менән аралашып, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының кейемдәре, биҙәнеү әйберҙәре менән ҡыҙыҡһыныуы ла юҡҡа түгел. Хәҙер бар донъяла этник ҡомартҡыларға иғтибар йүнәлтелә, тарихи хәтер тергеҙелә. Беҙгә лә башҡортлоғобоҙҙо сағылдырған өй ҡаралтыларын, милли кейемдәребеҙҙе ҡыйыуыраҡ индерергә кәрәк ҡулланылышҡа. Әйткәндәй, хәҙер районыбыҙҙа башҡорт милли кейеме теген, һатыуға сығарған оҫтабикәләр күбәйҙе. Ир-егеттәребеҙҙең дә төрлө йорт ҡаралтылары эшләүгә тотоноп, шуны кәсепкә әйләндереүен теләйек. Бына шулай, оло быуын тормош һабаҡтарын йәш быуынға түкмәй-сәсмәй еткерергә тейеш, тигән фекер менән янып йәшәй һәм эшләй Баймаҡ ағинәйҙәре.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**



УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Аралашыу һәләте

MVM компанияһы президенты кесе Данто Манкес лидерҙың аралаша белеү һәләте тураһында былай тигән: "Лидерға башҡалар ярҙамында төрлө эштәр башҡарырға тура килә, шуға күрә ул илһамландыра һәм дәртләндерә, үҙе артынан башҡаларҙы эйәртә, йүнәлеш бирә, шулай уҡ тыңлай белергә тейеш. Бары тик аралашыу аша ғына лидер башҡаларҙы үҙенең күҙаллауҙарын үҙләштерергә, һуңынан уларҙы тормошҡа ашырырға мәжбүр итә ала".

Үҙегеҙҙең башҡалар менән аралашыу һәләтен нисек баһалайһығыҙ? Һеҙҙең өсөн аралашыу ысынлап та өҫтөнлөклө булып торамы? Башҡаларҙы илһамландыра һәм дәртләндерә алаһығыҙмы? Перспективағыҙҙы нисек күҙаллауығыҙҙы, оло маҡсатығыҙҙы кешеләргә улар һеҙҙе аңларлыҡ, әйткәндәрегеҙҙе үҙләштерерлек һәм тормошҡа ашырырлыҡ аныҡ, асыҡ итеп еткерә алаһығыҙмы? Кешеләр менән күҙгә-күҙ ҡарап аралашҡанда улар менән ысын мәғәнәһендә бәйләнеш булдыраһығыҙмы? Ә төркөмдәр менән? Әгәр күңелегеҙ төбөндә юғары хыялдар ятыуын ныҡлы аңлап та, уны һеҙҙе уратып алыусылар аңламай икән, тимәк, проблема һөҙөмтәле аралаша белмәүегеҙгә бәйле булыуы ихтимал.

**Өйгә эш**

**Үҙегеҙҙә аралашыу оҫталығын үҫтереү өсөн түбәндәгеләрҙе иҫегеҙҙә тотоғоҙ:**

- Тулы асыҡлыҡҡа өлгәшегеҙ. Күптән түгел генә яҙған хатты йәки башҡа документты анализлағыҙ. Уларҙа һөйләмдәр нисек төҙөлгән: ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итепме, әллә буталсыҡмы? Уҡыусыларығыҙ беренсе уҡыуҙан уҡ уларҙы аңлай аламы, әллә уларға һүҙлек тотоп ултырырға тура киләсәкме? Аҙ һүҙ ҡулланыу менән сикләндегеҙме? Аралашыу буйынса ысын белгестәрҙең, коммуникаторҙарҙың ысын дуҫтары - ябайлыҡ һәм асыҡлыҡ. Кем менәндер аралашыр өсөн тәғәйенләнгән сираттағы ҡағыҙығыҙҙы яҙыр алдынан ошо төп төшөнсәләрҙе иҫегеҙҙә тотоғоҙ.
- Иғтибарығыҙҙы бүлгеләмәгеҙ. Аҙна дауамында кем менәндер аралашҡанда иғтибарығыҙҙы фокус объектына ғына йүнәлтегеҙ. Ул үҙегеҙ, һеҙ аңлатҡан материал йәки аудитория булыуы мөмкин. Әгәр иғтибарығыҙ ситкә йүнәлгән булһа, уны ҡабат туплағыҙ. Кешеләр, уларҙың ихтыяжы, проблемалары һәм теләктәре тураһында уйлағыҙ. Кешеләрҙе нисек бар, шулай ҡабул итегеҙ һәм һеҙ иң яҡшы аралашыусы буласаҡһығыҙ.
- Идеяғыҙҙы тормошҡа ашырығыҙ. Аралашыу барышында кешеләргә нимә һөйләүегеҙ менән ғәмәлдәге эшмәкәрлегегеҙ араһында айырма бармы? Ышанысլы бер нисә кешенән үҙегеҙҙең хыялдарығыҙҙы ниндәй кимәлдә тормошҡа ашырыуығыҙ тураһында белешегеҙ. Ситтән ҡарағанда күҙ уңығыҙҙан ысҡындырылған нәмәләр асыҡ күренәсәк. Уларҙың әйткәндәрен кәңәш тип ҡабул итегеҙ. Һуңынан инде тормошоғоҙға әҙмә-әҙлеклелек һәм эске ҡаршылыҡтарҙан арындырған үҙгәрештәр индереүҙе маҡсат итеп ҡуйығыҙ.



## 7 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Позднее раскаяние". Мелодраматический сериал (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.10 "Туман". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.05 "В наше время" (12+).
04.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Сильнее смерти. Молитва".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Драматический сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.45 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дорога домой". Драматический сериал. 1-3 серии (12+).
23.45 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
00.45 "Девчата" (16+).
01.30 "Двенадцать стульев". Сериал.
02.50 "Сильнее смерти. Молитва".
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Дилара Рафиҡова (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". "Әлмәт һандуғасы" (6+)
15.00 "Мөхәббәткә мәҙхиә". Илнур Лоҡманов (6+)
21.00 "Ил яҙмышы - ир яҙмышы". Артур Туҡтағолов (12+)

### БСТ

**7.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Новости недели (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 18.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 Новости недели (16+).**
**11.45, 02.00 "Королек - птичка певчая". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 05.30 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 Играет Р.Шайхутдинов.**
**14.15, 05.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.40 "Көндәлек" (6+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.45 "Физ-ра".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.45 Хоккей. Чемпионат КХЛ.**
**22.00 "Следопыт" (6+).**
**23.00 "Либо все побеждают..." (12+).**
**23.30 "Млечный путь" (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**03.30 К.Мэргэн. "Шомбай" (12+).**
**05.15 "Орнамент".**

## 8 АПРЕЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Позднее раскаяние". Сериал (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Секрет вечной жизни".
01.10, 03.05 "Драйв". Приключения (18+).
03.00 Новости (12+).
03.10 "В наше время" (12+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.45 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дорога домой". Сериал (12+).
23.50 "Специальный корреспондент"
00.50 "1944. Битва за Крым" (12+).
01.55 "Двенадцать стульев". Сериал.
03.20 "Закон и порядок-19". Сериал (16+).
04.15 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Фәнисә Бәҙретдинова(6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Уйна, ҡурай". Концерт (6+)
20.00 "Кис ултырып". Роберт Юлдашев (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Королек - птичка певчая". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 05.30 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 05.45 "Мелодии души". Концерт (12+).**
**14.45 "Хазина" (6+).**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 21.15, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (на русск. яз.).**
**21.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Баик".**
**24.00 "Автограф" (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 Х.Тухфат. "Береги любовь". Спектакль.**

## 9 АПРЕЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Позднее раскаяние". Сериал (16+).
23.20 "Политика" (16+).
00.20 Ночные новости.
00.30 "Соблазнитель". Комедия (16+).
03.00 Новости.
03.50 "В наше время" (12+).
04.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Следы великана. Загадка одной гробницы" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.45 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дорога домой". Сериал (12+).
23.50 "Договор с кровью" (12+).
01.45 "Двенадцать стульев". Сериал.
03.30 "Честный детектив" (16+).
04.00 "Закон и порядок-19". Сериал (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Гөлсөм Хәбибуллина (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Зөлхизә Илбәкова. Концерт (6+)
20.00 "Көндәлек" (6+)
20.00 "Йондоҙло күпер". Фирүзә Париж, Азат Йыһаншин (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15, 05.00 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Королек - птичка певчая". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 05.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 05.45 "Башҡорт йыры" представляет..."**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров".**
**15.45 "Семәр".**
**16.00 "Городок АЮЯ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә".**
**18.45 Хоккей. Чемпионат КХЛ. Плей-офф. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). Прямая трансляция.**
**22.00 "Историческая среда".**
**23.00 Диспут-клуб "Пятый угол" (16+).**
**23.45 "Одна, но пламенная страсть" (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 Ф.Буляков. "Узурпатор любви". Спектакль (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 10 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10, 03.45 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Позднее раскаяние". Мелодраматический сериал, заключительные серии (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "На ночь глядя" (16+).
01.05, 03.05 "Вы не знаете Джека". Драма (18+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "От всей души".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дорога домой". Сериал (12+).
23.50 "Живой звук" (12+).
01.45 "Двенадцать стульев". Сериал (12+).
03.30 "Закон и порядок-19". Сериал
04.20 "Комната смеха" (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Филүс Ҡаҙаҡбаев (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Бүреләр" төркөмө концерты (6+)
17.00 "Музыкаль ҡумта". Йәмил Әбделмәнов (6+)
20.30 "Кис ултырып ". Миңзәлә Хәйруллинаның ижад кисәһе (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 18.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 02.00 "Королек - птичка певчая". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Сердце, отданное людям" (6+).**
**15.15 "Ғәләмәт донъя".**
**15.45 "Шәп арба".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Сәләм+" (12+).**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (на русск. яз.).**
**21.00 "Лото 6 из 40 + Джокер". Прямой эфир.**
**21.15 "Наука 02" (6+).**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "Желаю всем добра" (6+).**
**01.00 "Весенние мелодии".**
**03.30 В. Дельмар. "Дальше - тишина". Спектакль (12+).**

## 11 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Музыкальный конкурс.
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.35 "Ночь в музее-2". Комедия (12+).
02.30 "Игра в прятки".Худ.фильм (16+)
04.25 "В наше время".
05.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "Ауаз".
10.05 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-ПФО".
17.30 "Личное дело". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
23.25 "Балканский капкан. Тайна сараевского покушения".
00.20 "Качели". Мелодрама (12+).
02.20 "Горячая десятка" (12+).
03.25 "Комната смеха".
04.25 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Имам Хатиб Мөхәммәт Ғәлләмов (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома". "Ислам" (6+)
17.00 "Февраль. Буран". Спектакль
21.00 "Иман нуры халҡыма". Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донъя".**
**11.00, 00.15, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 05.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Королек - птичка певчая". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 05.30 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 05.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Галерея изящных искусств" (6+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Байтус" (6+).**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Наука 02" (6+).**
**17.00 "История признания" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45 Хоккей. Чемпионат КХЛ. Плей-офф. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция.**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Жизни вопреки" (12+).**
**23.30 "Дарман" (6+).**
**01.00 "В минуты отдыха".**
**03.30 А.Яхина. "Не ломайте крылья". Спектакль (12+).**

## 12 АПРЕЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Укрощение огня". Худ. фильм (16+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.50 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак".
10.55 "Буран. Созвездие Волка" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытый космос".
16.25 "Королев". Биографическая драма.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Королев". Окончание фильма.
18.55 "Гагарин. Первый в космосе". Док. фильм.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Что? Где? Когда?"
00.10 "Потомки". Мелодрама (16+).
02.15 "Вулкан". Фантастический боевик (12+).
04.10 "В наше время".
05.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.40 "Без срока давности". Худ. фильм.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Вести. Дежурная часть".
11.55 "Честный детектив" (16+).
12.25 "Женская дружба". Худ. фильм (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным.
15.35 "Субботний вечер".
17.55 "Юрмала". Фестиваль юмористических программ (12+),
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Вопреки всему". Мелодраматический сериал (12+).
00.40 "Моя любовь". Мелодрама (12+).
02.50 "Вольгалла: сага о викинге". Худ. фильм (16+).
04.40 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Урал Иҙелбаев
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "М. Исҡужина дуҫтарын йыя". Концерт (6+)
19.00 "Автограф". Илдар Сәйетов (6+)
21.00 "Сүллектең аҡ ҡояшы". Фильм (6+)

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Алтын балта". Спектакль (6+).**
**09.30 "Сәләм+" (12+).**
**09.45 "Көндәлек.Дуванский район" (6+)**
**10.15 "КЛИО" (6+).**
**11.00 "Здоровое решение" (12+).**
**11.30 "Аль-Фатиха".**
**12.00 "Следопыт" (6+).**
**12.45 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**13.15, 06.30 "Замандаштар" (6+).**
**13.45, 18.15, 06.15 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Башкирская Юниор-лига КВН" (6+).**
**17.45 "Автограф".**
**19.00 "Башкорттар".**
**19.30 "Хазина".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Еду я в деревню".**
**20.45 "Вопрос+Ответ = Портрет" (6+).**
**21.30 "Новости" (на русск.яз.).**
**22.00 "Башҡорт йыры-2014".**
**22.45 "Попкорм. Светская хроника" (16+).**
**23.15 "Детский альбом. Глава вторая".**
**00.30 "Желтоухий". Худ. фильм (12+).**
**03.00 "Жизнь замечательных людей" (16+).**
**03.30 Г.Шафиков. "Точка притяжения". Спектакль БГАД им. М.Гафури (12+).**
**05.45 "Сердце, отданное людям". Р.Уметбаев (6+).**

## 13 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30, 06.10 "Медвежонок Винни и его друзья". Анимационный фильм.
06.00 Новости.
06.40 "Укрощение огня". Худ. фильм (16+).
08.10 "Служу Отечеству!" (16+).
08.45 "Смешарики". "ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Вячеслав Тихонов. Разговор по душам" (12+).
11.10 "Пока все дома".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Встречаемся в ГУМе у фонтана" (16+).
13.20 "Свадебный переполох" (12+).
14.20 "Вспоминая Вячеслава Тихонова" (16+).
15.55 "Дело было в Пенькове". Мелодрама.
17.45 "Вечерние новости" (с субтитрами).
18.00 "Точь-в-точь!" Шоу перевоплощений.
21.00 Воскресное "Время".
22.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+).
00.15 "Странная жизнь Тимоти Грина". Комедия (12+).
02.10 "Скорость". Худ. фильм (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.15 "Время желаний". Худ. фильм.
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.40, 14.30 "Васильки". Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
17.00 "Один в один". Пародийное шоу.
20.00 "Вести недели".
21.30 "Первая Мировая. Самоубийство Европы" (12+).
23.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
01.20 "Допустимые жертвы". Мелодрама (16+).
03.20 "Планета собак".
03.55 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Зифа Нагаева (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Айгөл иле". Спектакль (6+)
18.00 "Йондоҙло сәғәт". Илнур Лоҡманов менән (6+)
21.00 "Кис ултырып". Рәүис Заһитов (12+)

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома".**
**09.00 "Еду я в деревню".**
**09.30, 19.00 "Автограф" (6+).**
**10.00 "Бауырһаҡ".**
**10.15 "Городок АЮЯ".**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Шәп арба".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Семәр" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар".**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Вестник "Газпром трансгаз Уфа"**
**16.45 "Замандаштар" (6+).**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Виртоузы Москвы".**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.00 "Любимое дело" (12+).**
**20.30 "Время спорта" (16+).**
**21.00 "Лото 6 из 40 + Джокер".**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.00 "Баик".**
**23.00 "Вечер.com" (12+).**
**23.45 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00, 06.30 "Единое время" (16+).**
**02.15 "Жизнь замечательных людей" (16+).**
**02.45 "Что гложет Гилберта Грейта". Худ. фильм (16+).**
**04.30 "Г.Саламатова, Т.Бабичева. "И день, и век" (12+).**
**06.00 "Попкорм. Светская хроника" (16+).**

*ИҒЛАН*

Редакцияға **тәжрибәле бухгалтер** талап ителә. **(347) 246-03-23, 253-25-44** телефондары буйынса мөрәжәғәт итергә.

✓ *Тәкәббер кешенең күңелендә изгелек булыуы икеле; ул һәр ваҡыт күпкә лайыҡлымын, әммә аҙыраҡ алам, тип иҫәпләй.*

*(Генри Бичер).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ИЛЕШ РАЙОНЫ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**13-сө һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Таһиров. Стипендиат. Кипр. Ҡарағас. Фрегат. Акванавт. Ҡыяр. Енәйәтсе. Аквариум. Торомтай. Юлбашсы. Сәнәғәт. Майя. Хәкимов. Локатор. Вәл. Науа. Мәғариф. Информация. Әхмәтшин. Трос. Евро. Минус. Тәкәт. Түрә. Ралли. Ҡоно. Атлантида. Орлов. Ҡояш.

**Вертикаль буйынса:** Меню. Парламентер. Бамбук. Оят. Райка. Арахис. Саян. Сауҡа. "Арифмометр". Атлет. Алашар. Топинамбур. Атолл. Имашев. Алҡыш. Индекс. Ярсыҡ. Тояҡ. Арай. Әрмән. Төрөк. Сәхтиән. Аҙаш. Атом. Канау. Ниргә. Аметист. Ғимаев. Томат. Вейл. Нәмә.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# НИСЕК ӨЛГӘШЕРГӘ?

**Ҡөрьәндә әйтелә: "Ысынлап та, [намаҙ] - буйһоноусыларҙан тыш бөтәһе өсөн дә ауыр йөк" ("әл-Баҡара" сүрәһе 2/45).**

Бер ваҡыт Баһаутдин Нәҡшбәндиҙән: "Кеше намаҙҙа нисек итеп хушу - тулыһынса буйһоноу һәм ысын күңелдән тәрән бирелеп доға ҡылыу хәленә инеүгә өлгәшә ала?"- тип һорайҙар. Дин әһеле түбәндәге шарттарҙы һанап сыға: "Ашҡа иғтибарлы булырға, тик хәләл ризыҡ ҡына ашарға; тәһәрәт ваҡытында иғтибарлы һәм уяу булырға; тәкбирҙең тәүге һүҙҙәрен ишеткәс тә бөтә йөрәгең менән Хоҙайға һыйынырға (хәҙистә әйтелгәнсә: "Аллаһы Тәғәләне күреп торған кеүек доға ҡыл! Һин Уны күрмәгән хәлдә лә Хоҙай һине күреп, белеп тора".Бухари, "Иман", 37); Аллаһҡа һөйөү һаҡла һәм тәҡдирең Уның ҡуло булырға яҙғанын иҫеңдә тотоп, гонаһ эшләүҙән алыҫ тор".

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Апрель (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (7) дүшәмбе | 6:06 | 7:36 | 14:30 | 19:32 | 21:02 | 22:32 |
| 8 (8) шишәмбе | 6:03 | 7:33 | 14:30 | 19:34 | 21:04 | 22:34 |
| 9 (9) шаршамбы | 6:01 | 7:31 | 14:30 | 19:36 | 21:06 | 22:36 |
| 10 (10) кесе йома | 5:58 | 7:28 | 14:30 | 19:37 | 21:07 | 22:37 |
| 11 (11) йома | 5:56 | 7:26 | 14:30 | 19:39 | 21:09 | 22:39 |
| 12 (12) шәмбе | 5:53 | 7:23 | 14:30 | 19:41 | 21:11 | 22:41 |
| 13 (13) йәкшәмбе | 5:51 | 7:21 | 14:30 | 19:43 | 21:13 | 22:43 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 апрель "Ғәфү ит мине!"** (И.Герман), мелодрама

**9 апрель "Бер мәл санаторийҙа"** (Н.Ғәйетбаев), комедия

**9 апрель "Experiment"** (В.Красногоров), психологик драма

**10 апрель ПРЕМЬЕРА "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр!"** (Я.Пулинович)

**11 апрель "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара юрға"** (Т.Ғарипов), мюзикл

**12 апрель "Аҡ пароход"** (С.Айытматов), драма

**13 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 апрель "Нух кәмәһе"** (У.Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 15.00

**10-11 апрель ПРЕМЬЕРА "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В.Красногоров), баш ватырлыҡ комедия

**12 апрель "Чиполлино"** (Д.Родари), мажара. Башлана 15.00

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**6 апрель** йәш йырсы **Искәндәр Ғәзизов** йыр-моң һөйөүселәрҙе **"Юлға сығам йыр менән"** тип аталған концертына саҡыра. Тамашала Алмас менән Айҙар Юнысовтар, Фәрүәз Урманшин, Фәриҙә Ғаззалова, Резеда Әминева, Рөстәм Шаһыбалов, "Далан" фольклор-эстрада төркөмө ҡатнаша. Башлана 18.00.

*ЙӘШЕЛ ДАУА*

# КӨНБАҒЫШ

**Күңелһеҙ мәлдәрҙә күптәр ваҡытын көнбағыш сиртеп уҙғара һәм бер кем дә унда магнийҙың арыш икмәгенә ҡарағанда алты тапҡыр күберәк булыуы, ҙур күләмдә ҡиммәтле Е витамины тупланыуы тураһында уйланғаны юҡтыр. Халыҡ медицинаһында ла дауаланыуҙың тик бер-ике төрө генә билдәле.**

**Анкилоз.** Өлгөрөп килгән 6 көнбағыш башын алырға, емештәрен таҙалап, 1 литр һыуға һалырға. Ҡояшта 40 көн төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1 ҡалаҡ ҡабул итергә. Быуындар 2-3 айҙан һуң хәрәкәтләнә башлар, шулай ҙа дауаланыуҙы тағы ла дауам итергә кәңәш ителә.

**Вегетатив-ҡан тамырҙары дистонияһы.** Сәскә атҡан ваҡытында көнбағыш һабағын алырға, ваҡлап турарға, киптерергә. Бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә. Һарҡытырға. Был төнәтмә ҡан тамырҙарын таҙарта, баш һәм нервы ауырыуҙарын баҫа.

**Бөйөр-таш ауырыуы.** 3-4 көнбағыш тамырын ваҡларға. 1 стакан иҙмәгә 3 литр һыу ҡойорға, 3 минут бешерергә. Һарҡытырға, ләкин тамырҙарын ташламаҫҡа. 3 тәүлектә бөтә төнәтмәне эсергә (көнөнә 1 литр). Ошо уҡ тамырҙарҙы тағы ла 3 литр һыу ҡойоп, 15 минут бешерергә. Һарҡытырға, ә тамырҙарын ташларға. Төнәтмәне өс көндә эсергә. Был төнәтмә бөйөрҙән таш ҡыуыуҙа ныҡ ярҙам итә.

**Ашҡаҙан яман шеше.** 1 ҡалаҡ көнбағыштың киптерелгән ситке япраҡтарын алырға. 1 стакан һыу ҡойоп ҡайнатырға, ләкин бешермәҫкә. 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр эҫе көйөнсә ашарҙан ярты сәғәт алда стакандың өстән бер өлөшөн эсергә.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

*✓ Аҡыл эйәһе шулай тип яуаплай: "Изгелекте лә аҡыл менән эшләргә кәрәк. Изгелекте көҙҙә тотмаған аҡыл - насар, ләкин аҡылды алға ҡуймаған изгелек тә һәйбәт түгел..."*



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## ОҪТАЛЫҠ СЕРЕН АСЫП...

**Өфөлә кейеҙ баҫыу оҫталары араһында "Урал-батыр эпосы персонаждары костюмы" темаһына арналған "Тамға" республика симпозиумы булып үтте.**



Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты тарафынан ойошторолған сара сиктәрендә "Урал-батыр" эпосы персонаждары костюмдарын әҙерләп, күргәҙмә эшләү һәм дефиле уҙғарыу, "Шаблон буйынса кейеҙҙән кейем әҙерләү" буйынса мастер-класс һәм түңәрәк ҡор ойошторолдо. Унда Өфө, Белорет, Октябрьский, Сибай, Учалы, Күмертау, Нефтекама, Благовещен, Стәрлетамаҡ ҡалаларынан, Шишмә, Ейәнсура, Иглин, Кушнаренко райондарынан килгән 28 оҫта 12 костюм эшләне.

## ЙЫРСЫЛАР - ХАЛЫҠ-АРА САРАЛА

**Баш ҡала төрки йәштәренең "Урал моңо" Халыҡ-ара музыкаль конкурс-фестивалендә Башҡортостан исеменән сығыш яһаясаҡ ҡатнашыусылар өсөн беренсе һайлап алыу туры уҙҙы.**

Мәртәбәле конкурста ҡатнашыу өсөн Әбйәлил, Әлшәй, Баҡалы, Бишбүләк, Благовар, Бөрйән, Дәүләкән, Дыуан, Ишембай, Ҡырмыҫҡалы, Күгәрсен, Нуриман, Өфө, Хәйбулла райондарынан һәм Күмертау, Нефтекама, Өфө ҡалаларынан, шулай уҡ Ырымбур өлкәһенән һәм Төркмәнстан Республикаһынан 43 конкурсант үҙ көсөн һынаны. Композитор Урал Иҙелбаев, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы доценты Светлана Слягузова, "Ҡурай-ТВ" телеканалы директоры Айгөл Әхмәҙиева, фестивалдең режиссеры Илшат Фәхретдинов һәм башҡа сәнғәт оҫталарынан торған баһалама ағзалары һайлап алыуҙың икенсе турына 14 ҡатнашыусыны үткәрҙе.

## ӘСӘЛӘР ЯРЫША

**Башҡортостанда "Гүзәлкәй" асыҡ республика гүзәллек һәм талант конкурсына ғаризалар ҡабул ителә башланы. 18 апрелдә беренсе һайлап алыу туры үтә.**

Был ярышта ғаиләләрендә инвалид балалар тәрбиәләүсе ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнаша ала, уларға нисә йәш булыуы мөһим түгел. Улар үҙҙәре менән таныштырыу, һөнәртән күрһәтеү, Башҡортостан мәҙәниәтен белеү кимәле буйынса һынау тотасаҡ. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың рухи, ижади талаптарын ҡәнәғәтләндереүҙе маҡсат итеп ҡуйған "Гүзәлкәй" асыҡ республика гүзәллек һәм талант конкурсының Гала-концерты М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт драма театрында үтәсәк. Ойоштороусылар - Өфөләге инвалид балаларҙы һәм үҫмерҙәрҙе реабилитациялау үҙәге менән "Әсә йөрәге" әсәләр советы төбәк йәмәғәт ойошмаһы.

## МӘСКӘҮҘӘ - БАШҠОРТ МОҢО

**16 апрелдә Мәскәү композиторҙар йортонда Салауат Низаметдинов иҫтәлегенә арналған Башҡорт йырының студент фестивале үтәсәк.**




Был мәҙәни сарала Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында белем алыусы талантлы студенттар "Башҡорт халыҡ йыры", "Халыҡ йырына әйләнгән эстрада йыры" һәм "Автор йыры" номинацияларында үҙҙәренең вокал оҫталыҡтарын күрһәтәсәк. Өҫтөнлөк Салауат Низаметдиновтың билдәле йырҙарына биреләсәк. Сараның төп маҡсаты - йәштәр араһында башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыу традицияларын һаҡлау һәм быуындарҙы берләштереүсе йырҙарҙы популярлаштырыу. Мәскәү тамашасыһы алдында фестиваль ҡунаҡтары - "Бүреләр" рок-төркөмө, "Zaman" этно-проекты, билдәле скрипкасы Сыңғыҙ Ханнанов, йырсы Айгөл Үтәғәнова һәм "Тамыр" студияһының балалар вокал ансамбле сығыш яһаясаҡ.

## СОЛТАНОВ МОҢО ТАҒЫ ХАЙРАН ИТТЕ

**Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында халыҡ йыраусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, башҡорт йыр сәнғәтен сит илдәрҙә танытыуға күп көс һалыусы мәшһүр йырсы Абдулла Солтановтың 85 йәшлек юбилейына арналған концерт үтте.**

Филармония артистары Флүрә Килдейәрова, Азат Айытҡолов, Әлфиә Юлсурина, Радик Вәлмөхәмәтов, Ишморат Илбәков, Вилдан Яруллин, Лилиә Ишемйәрова, Әлим Ҡәйүмов, Рушан Биктимеров, Марсель Ҡотоев, "Карауанһарай" менән "Риүәйәт" фольклор төркөмдәре юбилярҙы тәбрикләп сығыш яһаны. Тамашасыларҙы һөйөндөрөп, Абдулла Солтанов үҙе лә бер-нисә халыҡ йырын башҡарҙы. Ысын таланттарҙың моң шишмәһе ниндәй йәштә лә һайыҡмауына тағы бер тапҡыр шаһит булды тамашасы.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АТА-ИНӘҢӘ НИ ҠЫЛҺАҢ...

### алдыңа шул килер

Аҙ һүҙҙән мәғәнә сығыр, күп һүҙҙән бәлә сығыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ығы-зығыла булырға ратаһың икән, тимәк, һин әйләнә-тирәләгеләр күҙе алдында яҡшы булып күренергә теләйһең.

**(Макс Бирбом).**

Хоҙай имен сәйәхәт түгел, ә уның тыныс тамамланыуын хәстәрләй.

**(Аноним).**

Ахмаҡлыҡ та Хоҙай бүләге, тик уның менән артыҡ файҙаланырға ярамай.

**(Отто Бисмарк).**

Тәкәббер кешенең күңелендә изгелек булыуы икеле; ул һәр ваҡыт күпкә лайыҡлымын, әммә аҙыраҡ алам, тип иҫәпләй.

**(Генри Бичер).**

Беҙҙең һәр беребеҙ башҡаларҙағы бығa тиклем үҙе кисергән тойғоларҙы ғына аңлаусан.

**(Андре Жид).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡытай императоры ҡоштар яратҡан. Бер ваҡыт ул малай-шалайҙарҙың рогатканан атып, ҡоштарҙы үлтереүе тураһында ишетеп ҡала. Шунан ул былдай ҡарар сығара:"Кем дә кем император йәшәгән һарайға тере ҡош тотоп алып килә, уға бер ус дөгө биреләсәк". Быны ишеткән малай-шалайҙар ҡоштарҙы ҡырыуҙан туҡтай һәм урмандарға күп итеп ауҙар ҡора, ауға эләккән ҡоштарҙы император һарайына ташый башлай. Оҙаҡламай император һарайы ҡоштар менән тула. Тап ошо ваҡытта күрше батшалыҡтан бер аҡыл эйәһе император янына хәл белешергә инә. Һарайҙағы ҡоштарҙы күреп: "Был тиклем күп ҡоштар нимәгә һиңә?" - тип аптырап һорай. "Мин ҡоштарҙы йәлләйем, шуға уларҙы малай-шалайҙарҙан ҡотҡарырға ҡарар иттем. Хәҙер улар ҡоштарҙы үлтермәй, миңә алып килә", - ти император. "Ә ул ҡоштарҙың балаларын кем ашата һуң?"- ти һорай аҡыл эйәһе. "Ниндәй ҡош балаларын?"- тип аптырап китә император. "Һинең һарайҙағы ҡоштарҙың урманда ҡалған балаларын кем ашата, тим?"- ти аҡыл эйәһе. "Мин ул хаҡта уйламағайным шул", - ти император. Шунда аҡыл эйәһе былай ти: "Эйе, һеҙ ҡоштарҙы ратаһығыҙ һәм уларға изгелек эшләргә теләгәнһегеҙ, ләкин уларға иң ҙур яуызлыҡты ла һеҙ эшләгәнһегеҙ. Һеҙҙең урмандарҙағы ҡош оялары бөгөн үле ҡошсоҡ кәүҙәләре менән тулған. Һеҙ йөҙәрләп ҡошто ҡотҡарғанһығыҙ, әммә шунан биш тапҡырға күберәк ҡошсоҡто үлтергәнһегеҙ..." "Ах, изге кеше булыуы ҡалай ауыр!"- тип ҡысҡырып ебәрә шунда император. Аҡыл эйәһе быға ҡаршы шулай тип яуаплай: "Изгелекте лә аҡыл менән эшләргә кәрәк. Изгелекте күҙҙә тотмаған аҡыл - насар, ләкин аҡылды алға ҡуймаған изгелек тә һәйбәт түгел..."**

ХОККЕЙ

## ЕҢЕЛҺӘК ТӘ...

### еңәсәкбеҙ

**Континенталь хоккей лигаһының Көнсығыш конференцияһында ярымфинал уйындары башланды. 3 апрелдә Магнитогорск ҡалаһында урындағы "Металлург" командаһы "Салауат Юлаев"ты ҡабул итте һәм беренсе уйында 3:2 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.**

Ярымфиналға тиклем "Себер" командаһын еңел генә ҡыйратыуға өлгәшкән "Металлург" юлаевсыларға ҡаршы уйынды ла ышаныслы башланы. Шулай ҙа тәүге матчтағы беренсе шайба юлаевсылар иҫәбендә. Беренсе осорҙоң бишенсе минутында уҡ Денис Хлыстов Василий Кошечкин ҡапҡаһына юл асты. Уйын барышында хужалар иҫәпте тигеҙләүгә өлгәшһә лә, Теему Хартикайненың шайбаһы йәнә "Салауат Юлаев"ты алға сығарҙы. Ләкин Майк Кинэн командаһы тәнәфескә тиклем иҫәпте 2:2 еткерҙе. Икенсе осорҙа Сергей Мозякиндың шайбаһы уйындың аҙырын хәл итте.

Өсөнсө осорҙа юлаевсылар өсөн һәйбәт уйын күрһәтеү мөмкинлектәре булһа ла, баш тренер Владимир Юрзинов билдәреүенсә, "команда тейешле ритмға инә алманы". Ләкин серияларҙағы тәүге уйын Өфө командаһы уйынсыларының еңеүгә булған ынтылышын кәметмәне. "Беҙ бер генә уйын үткәрҙек. Бөтә серия алда әле. Көрәшергә кәрәк", - тине "Салауат Юлаев" командаһы һөжүм итеүсеһе Антон Слыпешев. Шуға күрә, алда Өфө командаһын тик еңеүҙәр генә көтәсәгенә ышанабыҙ.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 4 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5153
Заказ 1074